ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

25-31 март (буранай) 2023

№ 11 (1053)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йөрөгән аяҡҡа - йүрмә,**
йүрмә булмаһа - ярма

8-9

**Стәрлетамаҡ театрының...**
һоҡланып туйғыһыҙ Алмаҡайы ул

11

**Ғафуриҙар...**
йәшәү дәрте менән һоҡландырҙы

12

**Рамаҙан айы һәм...**
ураҙа тотоу тураһында ҡайһы бер хәҙистәр

13

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә баҫмабыҙға ваҡытынан алда 800 һум 10 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Интернет донъяһы бөгөн әрләш, талаш, ғәйбәт, аҡты ҡара тип күрһәтергә маташыусы хәбәрҙәр менән тулды. Ни өсөн кешеләр шул тиклем негативҡа әйләнде икән?

***Морат ЛОҠМАНОВ, журналист, Башҡортостан юлдаш телеканалының "Йома" тапшырыуы авторы һәм алып барыусыһы:*** Йөрәк буш тормай торған һауыт - яҡшылыҡ һалынмаһа, ул урынды яманлыҡ биләй. Интернетта, ғөмүмән, тормошта ла шул бер ҡағиҙә. Халыҡтың алтын аҡылына күҙ һалһаҡ, ә ул динебеҙ нәсихәттәре менән бер тамырҙан, күп һорауҙарға яуап күрербеҙ.

**Тик торғанға шайтан таяҡ тоттортҡан, тип әйтелә. Файҙалы эш менән мәшғүл кешенең интернетта соҡсоноп, тишектән йыртыҡ эҙләп ултырырға ваҡыты ла, теләге лә булмай. Яуаплылыҡ тәрбиәләнмәгәс, бөгөн ваҡыттың ҡәҙере китте. Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән. Күп һөйләү, юҡ-бар һөйләү - ул аҡылһыҙлыҡ билдәһе. Һүҙ ирбеге, тип алданып, күп кеше үҙе лә һиҙмәй шайтан тоҙағына килеп эләкте. Тәүҙә, бәлки, зыянһыҙ, шаярып ҡына әйтелгән шикелле булһа ла, яман һүҙ үҙенең этлеген эшләй башлай, ул күңелгә сүп булып һалына. Сүп өҫтөнә сүп өйөлә, йүнһеҙлек телдән ғәҙәткә күсә, артабан холоҡҡа әйләнә һәм күңел ҡарайып, тамам һәләк була. Иманһыҙлыҡтың ахыры - һәләкәт.**

Интернеттың, әлбиттә, файҙаһы күп, әммә ризыҡты ла бысраҡ ҡулың менән тотоп ашаһаң, зыянлыға әүерелә. Шуның шикелле, бөгөн беҙ интернетты үҙебеҙгә ҡаршы эшләтәбеҙ. Ҡара-ҡаршы һөйләшкәндә ихтирам әле һаҡлана, әҙәбебеҙ бар, ә интернетта ул юҡ кимәлендә. Интернетта кеше күңелен һаҡламай, йөҙ йыртып әйтергә күнеккәндән һуң был дорфалыҡ тормошҡа ла күсә. Алдашыу, енси мөнәсәбәттәр тураһында тартынмай бөтә ғаләмгә сығарып һөйләү ҙә ошо интернетта бөрөләнә. Ни сәсһәң - шуны урырһың. Халҡыбыҙға хас булмаған яланғас юмор үҫеште, ялған тарала, хәҡиҡәткә, бер-береңә ихтирам бөттө. Ә был күренештәрҙең һөҙөмтәһе - ошо ерҙән Аллаһтың рәхмәте алына, бәхет китә. Күптәнән инде саң ҡағыр ваҡыт еткән. Туп-тура һәләкәткә алып барыусы ҡурҡыныс сир ул интернет бәйһеҙлеге.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛАҢДЫ ҺАҠЛА...

## ҡыҙылсанан

**Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығында, республикала балалар араһында ҡыҙылса йоҡтороу осраҡтарына бәйле, вакцинация тураһында иҫкә төшөрҙөләр, шулай уҡ ошо ныҡ йоғошло инфекцияға ҡаршы ҡасан һәм кемгә прививка яһатырға кәрәклеген аңлаттылар.**

"Балаға бер йәш тулғансы мотлаҡ ҡыҙылсанан прививка эшләргә кәрәк, - тип билдәләнеләр ведомствола. - Алты йәштә вакцинаны ҡабаттан яһайҙар". 36 йәшкә тиклем бөтәһенә лә вакцина һалдырырға кәңәш ителә. 36 йәштән һуң - эш буйынса күптәр менән аралашырға тура килгән осраҡта һалдыралар. Тәү сиратта, медицина, шулай уҡ транспорт, балалар баҡсалары һәм мәктәп хеҙмәткәрҙәре хаҡында һүҙ бара. Кемдәр 55 йәштән өлкән, уларға иһә вакцинация сирләләр менән бәйләнештә булғанда ғына талап ителә. "Үҙегеҙҙең һәм балаларығыҙҙың прививкаһы бармы-юҡмы икәнен тикшерегеҙ. Әгәр ваҡыт етһә йәки мәғлүмәттәр юҡ икән, йәшәгән урынығыҙ буйынса поликлиникаға мөрәжәғәт итегеҙ һәм бушлай вакцина эшләтегеҙ", - тип белдерҙеләр "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығында.

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨЛГӨРҘӘР ӨЛГӨЛӨ БУЛА




**Утә күренмәле заманда йәшәйбеҙ. Ер шарының төрлө тарафтарында булған хәл-ваҡиғалар менән хәбәрҙарбыҙ. Мәғлүмәттең киңлеге ялҡытып та китә, валлаһи! Әммә Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында бейеп йөрөүсе башҡорт балалары төшөрөлгән видеороликты күргәндәр социаль селтәрҙәргә рәхмәт әйтеп, ҡыҫҡа һәм танһыҡ тамашаны ҡат-ҡат әйләнтеп ҡарағандарҙыр.**

(Дауамы 6-сы биттә).

12+

**✓ Ундайҙар бала саҡ осоронан һуң да үҙен башҡаларҙан кәм итеп тоя, шунлыҡтан, уңышлы кешеләргә, ыңғай уйлы, шат күңелле тиңдәштәре, замандаштарына ҡарата асыу, күрәлмаусанлыҡ менән ҡарай башлай.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИР-ЕГЕТТӘРЕБЕҘ...

## абруйлы булһын!

***Рәсүл ҠАРАБУЛАТОВ, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, ҡурайсы:*** Әлбиттә, тәү сиратта мине башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы - ҡурайға бәйле мәсьәләләр борсой һәм улар тиҙерәк сиселеш тапһын ине, тигән теләктәмен. Бөгөн ҡурайыбыҙҙы донъя кимәлендәге белгестәр, абруйлы ойошма-инстанциялар тарафынан үҙебеҙҙеке итеп раҫлатыу, ҡағыҙға теркәтеү мөһим. Республика халыҡ ижады үҙәге был өлкәлә мөһим эштәр атҡара, әммә ЮНЕСКО тарафынан раҫлатыу бурысы тора, шуны тиҙерәк бойомға ашыра алһаҡ ине, тим.

Тағы балалар тәрбиәһенә ҡағылышлы мине борсоған бер мәсьәлә бар. Бына беҙҙе, Советтар Союзы осоронда тыуып үҫкән быуынды, бәләкәйҙән илһөйәр, эшһөйәр итеп тәрбиәләнеләр. Башта ғаиләлә атай-әсәйҙәр бирҙе был тәрбиәне, аҙаҡ мәктәп һәм йәмғиәт дөйөм идеологияға ярашлы шәхесебеҙҙе формалаштырҙы. Тәүҙә октябрят, пионер, аҙаҡ комсомол булдыҡ. Илебеҙҙе яраттыҡ, армияға бармай ҡалыу беҙҙең өсөн ҙур трагедия һымаҡ ине. Бынан тыш, бәләкәйҙән эшкә өйрәнеп үҫтек: баҡсала ла эшләнек, мәктәптә дежурлыҡ итеп, таҡтаһын да һөрттөк, иҙәнен дә йыуҙыҡ, кәрәк булһа, колхоз баҫыуҙарына сығып китеп, көнө буйы шунда ла эшләнек. Бынан ҡулыбыҙ ҙа өҙөлмәне, уҡабыҙ ҙа ҡойолманы.

Ә хәҙер нисек? Атай-әсәйҙәр үҙҙәре үк балаларына эш ҡушмай, ә патриотик тәрбиә тураһында оҙаҡ йылдар онотоп торҙоҡ. Мин был төптө дөрөҫ түгел тип уйлайым. Балаларыбыҙға бәләкәйҙән дөрөҫ хеҙмәт тәрбиәһе биреп, илһөйәр итеп үҫтерергә кәрәк. Ситтәр илебеҙгә ниндәй генә бысраҡ яғып, ғәйеп тағып маташмаһын, беҙҙең ил кеүек бай, төрлө милләттәр татыу йәшәгән бүтән ил юҡ бит. Мин уны бөтә күңелем менән яратам. Ҡайҙа йөрөһәм дә Рәсәй, Башҡортостан тураһында ғорурланып һөйләйем. Бына шундай илһөйәрлек рухы булһа, ир-егеттәр алдында бер ниндәй ҙә ауырлыҡтар, ил алдында бурысын үтәргә теләмәү кеүек икеләнеүҙәр тормаҫ ине.

Илһөйәрлек һәм хеҙмәт тәрбиәһе үҙенән-үҙе атай тәрбиәһе, ир-егет абруйы мәсьәләләренә барып тоташа. Ҡыҙғанысҡа күрә, ғаиләлә тәрбиәнең күп өлөшө ҡатын-ҡыҙ иңенә төшә, шуға ла атайға ҡарағанда әсәйҙең бәҫе юғарыраҡ. Мәктәптәрҙә лә ир-егет уҡытыусылар 20 процент тирәһе генә. Ир-ат улы алдында эшһөйәрлек өлгөһө күрһәтеп, ғаиләһен ҡарарға, аҫрарға тигән маҡсат ҡуйып йәшәргә, яуаплылыҡты үҙ иңдәренә һалып, бөтә проблемаларҙы хәл итергә тейеш. Юғиһә, ир бисә ауыҙына ҡарап торһа, йәки эшһеҙ ятһа, эсеп йөрөһә, улына ниндәй тәрбиә бирә алһын? Ир-егеттәр үҙен ҡулға алып, үҙ бәҫен аңлап, ғаиләлә лә, йәмғиәттә лә үҙ иңенә яуаплылыҡ йөкмәп, үрнәк күрһәтеп йәшәһен!

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Интернет донъяһы бөгөн әрләш, талаш, ғәйбәт, аҡты ҡара тип күрһәтергә маташыусы хәбәрҙәр менән тулды. Ни өсөн кешеләр шул тиклем негативҡа әйләнде икән?***

***Рәмилә ШАФИҒУЛЛИНА, БР Мәғарифты үҫтереү институты педагогика һәм психология кафедраһының өлкән уҡытыусыһы, БР мәғариф отличнигы:*** Интернет донъяһындағы негатив һәм агрессия ҡайҙандыр ситтән килеп инмәгән, ул беҙҙең бөгөнгө тормошобоҙ сағылышы, көҙгөһө.

Бөгөнгө шарттарҙа кешеләрҙең, бигерәк тә йәштәрҙең, мәғлүмәти-аралашыу технологияларына эйә булыуы компьютер менән эш итә белеүенә, аралашыу даирәһенең киңәйеүенә һәм шуның менән үҙаллы рәүештә белемдәрен арттырыуға, мөмкинлектәрен бойомға ашырыуға күп йәһәттән булышлыҡ итте. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, мәғлүмәти-аралашыу технологияларының өҫтөнлөктәре менән файҙаланыу бик ҙур проблемаларға ла килтереп терәне. Иң тәүҙә был интернетта аралашыуҙың анонимлығына ҡағыла.

**Йәшәйешендә туранан-тура, йөҙгә-йөҙ аралашыу мөмкинлеге булмаған ҡайһы бер кешеләр социаль селтәрҙә аралашыу юлы менән үҙ баһаһын күтәрергә, йә булмаһа, тормошта эргә-тирәһендәгеләрҙән алып еткерелмәгән иғтибарҙы тулыландырырға теләй. Һәм әлеге лә баяғы анонимлыҡ әхлаҡ ҡағиҙәләренә һыймаған тәртип, ҡәтғи, хатта тупаҫ комментарийҙар, яуаптар һәм постар, кемделер кәмһетеүҙәр, мыҫҡыл итеү артабан ғәҙәти булмаған "нормаға" әүерелә башлай. Былдай холоҡло кешеләр тиҙ ҡыҙып китеүсән, үпкәселдәр һәм юҡ ҡына сәбәптән дә асыу белдерергә, нәфрәтләнергә мөмкиндәр.**

Бында һүҙ психик сирләләр хаҡында бармай, әлбиттә. Агрессив холоҡ шулай уҡ тыумыштан да бирелмәй, ә бына кеше аңында, тәртибендә ул билдәле бер шарттар арҡаһында ( ауыр бала саҡ, эскесе ата-әсә йоғонтоһо, етешһеҙ тормош шарттары һ.б.) йылдар буйы һалына барырға мөмкин. Ундайҙар бала саҡ осоронан һуң да үҙен башҡаларҙан кәм итеп тоя, шунлыҡтан, уңышлы кешеләргә, ыңғай уйлы, шат күңелле тиңдәштәре, замандаштарына ҡарата асыу, күрәлмаусанлыҡ менән ҡарай башлай.

Виртуаль аралашыуҙа сик белмәү, һаҡһыҙлыҡ интернет ҡулланыусыларҙың йәшәгән адресы, телефон номеры, веб-сайтына паролдәре кеүек шәхси мәғлүмәттәрен асыҡлау хәүефен дә барлыҡҡа килтерә һәм был әлеге яман уйлы негатив кешеләр өсөн уғата хаслыҡҡа юл аса. Тап ана шундай осраҡтарҙан зыян күреүселәр байтаҡ булды ла инде. Интернет-социаль берләшмәләрҙәге былдай әхлаҡһыҙлыҡ, кеше кәмһетеүҙәр, мыҫҡыллауҙар, төрлөсә ҡурҡытыу-янауҙар һәм тупаҫлыҡ киберагрессия тип атала. Киберагрессорҙар тап шул әлеге анонимлыҡҡа иҫәп тота ла инде. Ғәҙәттә йышыраҡ балалар һәм үҫмерҙәр ана шуларҙың ҡорбандарына әүерелә. Киберагрессияның ҡулланылған алымдарына бәйле троллинг, кибербуллинг, астротурфинг тигән төрҙәре лә бар әле. Интернет селтәрҙәренең былдай "ауына" килеп ҡапмаҫ өсөн үҙ диуарында шәхси мәғлүмәттәрендә, күп итеп фотоһүрәттәрендә биреүҙән тыйылырға, теләһә ниндәй сайттарға һәм аралашыу эҙләүселәргә ышанып бармаҫҡа, уларға юл ябырға кәңәш ителә.

**Социаль селтәрҙәрҙәге аралашыуҙарҙа күҙәтелгән тупаҫлыҡ, нәфрәт һәм бер-берен күрәлмаусанлыҡ билдәләре йәштәрҙә лә, нисек кенә ғәжәп булмаһын, өлкәндәрҙә лә бар. Ниндәйҙер бәләгә осраған кешегә ярҙамға ашығыу урынына уның эргәһендә телефонын тоҫҡап, фото-видеоға төшөрөп тороусылар байтаҡ. Был йәһәттән күп нәмә ғаиләләге, мәктәптәге тәрбиә эшенә бәйле. Ғөмүмән, бөгөн йәмғиәтебеҙҙә төп социаль һәм әхлаҡ ҡанундары эшләүҙән туҡтаны, нимә яҡшы, нимә насар, тигән төшөнсәләрҙе айырып ҡарау ҙа юҡҡа сыҡты һымаҡ. Һәр кем үҙ мәнфәғәттәренә бикләнде.**

Бер-беренә тупаҫлыҡ, битарафлыҡ, шаҡшы теллелек, һүгенеү күпселек өсөн ғәҙәти "тәртип"кә әйләнә бара. Ә тормошта нимә - виртуаль донъябыҙҙа ла шул. Социаль селтәрҙәрҙә даими рәүештә кемделер битәрләү, норматив булмаған лексикаға баҫым яһау бәғзе берәүҙәр өсөн хатта ки батырлыҡ, текәлек тип тә ҡабул ителә, күрәһең. Нисек кенә булмаһын, күпселек өсөн былдай "быу сығарыу" йәшәйеш шарттарынан ҡәнәғәтһеҙлектең сағылышы ла ул. Йәмғиәттәге һуңғы йылдарҙағы социаль-иҡтисади тетрәнеүҙәр рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәрҙең бәҫһеҙләнеүенә килтерә; шуның эҙемтәһе булараҡ, асоциаль һәм агрессив холоҡло әҙәмдәрҙең барлыҡҡа килеүенә шаһитбыҙ.

*ПАРАДОКС*

# ХОҠУҠ ХАҠЫ



**Фатир хаҡтары уларҙың үҙҡимммәтенән нисә тапҡырға артығыраҡ икән? Шуны белергә ине. Өфөләге хаҡтар АҠШ-тың ҡайһы бер ҡалаларынан юғарыраҡ, тиҙәр. Шулайҙыр.**

Самалап ҡараһаң, нимәләрҙән тора ул фатир: ике-өс машина йөгө ҡом да, шунсама кирбес, тиҫтәләгән тоҡ цемент та, өс-дүрт кубометр таҡта, бер центнер самаһы арматура, быяла, башҡа ваҡ-төйәк инде. Ҡыҫҡаһы, фатирҙың үҙ-ҡимммәте, уҙа барһа, 100-150 мең һум самаһы барҙыр. Шулай булғас, ниңә шул тиклем ҡиммәт ул беҙҙә фатир? Әле генә башыма килеп һуҡты: баҡтиһәң, фатирҙың хаҡы уны төҙөр өсөн киткән материалдарҙың хаҡы менән билдәләнмәй, имеш, ә шул фатирҙа йәшәү хоҡуғы шулай ҡиммәт баһалана. Хоҡуҡ хаҡы шулай. Әллә мин яңылышаммы икән? Хәҙер фатирҙы ипотекаға бирә башланылар. Был осраҡта фатир хаҡын түләп бөткәнсе банк процентарына тағы ла бер фатир хаҡы ҡушыла. Ә ниңә был осраҡта һис юғы икенсе фатирҙың хоҡуғын да ипотека түләгән кешегә бирмәйҙәр икән? Һуң аҡсаһы түләнгәс... Кеше ғүмере буйына ипотека түләй. Хатта пенсияға сыҡҡас та дауам итә түләү. Түләп өлгөрмәй баҡый донъяға күсһә, түләү эстафетаһы балаларына күсә. Ҡалаларҙың күпселек халҡы фатир өсөн йәшәй. Улай ғына ла түгел, уның йәшәүенең төп маҡсаты - фатир алыу, ҡом, кирбес, бетон, арматура хаҡына ғүмер итеү. Ошонан да ҙурыраҡ парадокстың булыуы мөмкинме икән!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Иран менән хеҙмәттәшлеген артабан үҫтереү өсөн махсус эшсе төркөм ойошторола. Республика яғынан уны Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов, Иран яғынан иһә Ирандың сәнәғәт, рудниктар һәм сауҙа министры урынбаҫары Алиреза Пейман Пак етәкләй.

✓2023 йылда Ағиҙел, Дүртөйлө, Ишембай, Мәләүез һәм Яңауыл ҡалалары заманса уңайлы йәмәғәт киңлектәрен төҙөкләндереү проекттарын тормошҡа ашырыуға федераль бюджеттан 435 миллион һум ала. Улар бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи биләмәләрҙә уңайлы ҡала мөхите булдырыу буйынса Бөтә Рәсәй конкурсында еңеп сыҡты.

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған ҡарарында республикала граждандарҙың үҙ ихтыяжы өсөн ағас һатып алыу-һатыу килешеүен төҙөү тәртибенә үҙгәрештәр индерелә. Документтың яңы редакцияһына ярашлы, ағас әҙерләүгә өҫтөнлөклө хоҡуғы булған граждандар категорияһына төҙөлөш йәки хужалыҡ алып барыу өсөн ер участкаһы булған, махсус хәрби операцияла ғүмере өҙөлгән яҡташтарыбыҙҙың ғаилә ағзалары: хәләл ефеттәре, ата-әсәһе йәки уллыҡҡа алыусылар индерелгән.

✓Башҡортостанда дөйөм хаҡы 100 миллион һумдан ашыулыҡ дүрт яңы юл буйы комплексы төҙөлә, тип хәбәр итте республика Премьер-министры Андрей Назаров. Уларҙың барыһы ла Шишмә районында. Республикала 1100-ҙән күберәк ошондай объект эшләй, киләсәктә 10 миллиард һумдан ашыу инвестиция һалып, йәнә 95-те асыу планы бар.

✓15 апрелдән Башҡортостанда 2024 йылға төҙөкләндереү объекттарын һайлау өсөн "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" проекты буйынса тауыш биреү башлана. Республика Хөкүмәте вице-премьеры Алан Марзаев билдәләүенсә, әле ирекмәндәрҙе теркәү башланған. Онлайн-тауыш биреү 31 майға тиклем дауам итә. Алан Марзаев 2023 йылда республикала 122 йәмәғәт киңлеген һәм биләмәһен яңыртырға йыйыныуҙарын иҫкә төшөрҙө.

✓ *Күпселек осраҡтарҙа ана шундай йәмһеҙ ҡыланыусы әҙәмдәргә башҡаларҙың килешеп ҡарауы, ҡәтғи рәүештә уны "урынына" ҡуйырға, ауыҙын ябырлыҡ аҡыллы һүҙ әйтеп, туҡтатырға ынтылмауы аңлашылып бөтмәй.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Интернет донъяһы бөгөн әрләш, талаш, ғәйбәт, аҡты ҡара тип күрһәтергә маташыусы хәбәрҙәр менән тулды. Ни өсөн кешеләр шул тиклем негативҡа әйләнде икән?***



***Айбулат УРАЗБАХТИН, психолог:*** Дөрөҫ әйтәһегеҙ, бөгөн бөтә халыҡ: ултырғанынан алып, шыуышҡанына тиклем интернетҡа ҡапланды һәм ошо виртуаль донъяла үҙенә ниндәйҙер, күңел бушатырҙай, тип әйтәйемме, урын тапты. Ә бит күптәр уға, аҡ ҡағыҙға яҙылған хәкиҡәтте алмаштырмаһа ла, барыбер ышана, хаҡлыҡ эҙләй йәки кемдәлер әрләй, тәнҡитләй, һис булмаһа, төрлө постар аҫтына комментарий яҙып булһа ла күңелен бушата, йыш ҡына кемдәндер үс алдым, тип уйлай; шул уҡ ваҡытта кәңәш эҙләй, ярҙам һорай, власть органдарына мөрәжәғәт итә.

Ошо йәһәттән иң тәүҙә беҙгә шуны аңлау кәрәктер: аралашыу сараһы булараҡ, телевидение, радиомы ул әллә гәзит-журналмы - уларҙың бөтәһе лә йәмғиәт һәм кеше аңы менән идара итеү сараһы булараҡ сығыш яһай. Бөгөнгө көн ошо сараларға интернет та килеп өҫтәлде һәм үҙенә шул уҡ функцияны алды, тиергә лә булалыр, моғайын. Әгәр ҙә тәүге төркөмдәге киң мәғлүмәт сараларының теге йәки был кимәлдәге власть органдары йөҙөндә ойоштороусылары булып, юҡ тигәндә лә, барыбер улар цензура тарафынан көйләнһә, интернетты иһә, кеше аңына тәьҫир итеүсе сара булараҡ, "ирекле ҡош, һөйәкһеҙ тел" тип әйтергә лә булалыр. Дөрөҫ, бында ла барыбер ҡайһы бер социаль сайттар һәм мәғлүмәт порталдарға тыйыу һалыу, контролһеҙ генә булманы, юғиһә, билдәле бер даирәләр интернет мөмкинлектәрен киң аудитория алдында үҙ мәнфәғәттәре өсөн файҙаланырға әҙер генә тора. Шуға күрә лә ҡайһы бер илдәрҙә, мәҫәлән, Иран, Сәғүд Ғәрәбстаны, Төркиә, Греция, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Судан, Индонезияла ил системаһына ҡаршы эшләүсе киң мәғлүмәт сараларына, отош уйындары кеүек сайттарға дәүләт тыйыуы һалынды. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, социаль селтәрҙәрҙә аралашыусыларҙың тәртибе мәҙәнилек сиктәрен дә, закон нигеҙҙәрен дә һанға һуҡып бармауына йыш шаһит булабыҙ. Ереш-талаш, "бит тырнаш", һүгенеүҙәр, бер-берен мыҫҡыллау осраҡтары йыш ҡына хатта аҙаҡ һуғышыу, судлашыу, хатта үлтереш менән дә тамамланып ҡуя.

**Кешеләрҙең социаль селтәрҙәге йә чаттарҙағы бындай ҡылығын ни менән аңлатырға була? Беренсенән, бындай йәмһеҙ күренештәр, әлбиттә, кешенең эске мәҙәнилеге сағылышын күрһәтеүсе факт. Чаттарҙа яҙышҡанында ул үҙен нисек тота, тимәк, уның башҡаларға мөнәсәбәте лә шулай икәне күренеп тора. Чаттарҙағы агрессив холоҡ төрлө сәбәптән барлыҡҡа килеүе бар: кешенең психологик торошо, хатта һаулыҡ кимәле, уның асыуына тейеүсе сәбәп, үҙенең тормошонан ҡәнәғәт булмау. Бындай кешенең йыш ҡына чаттарҙа фекер алышыу темаһына мөнәсәбәте булмауы ла бар, ләкин ул һөйләшеү барышына ҡыҫылып, үҙенең дөйөм хәлен, кәйефен белдереүҙе кәрәк тип таба, күрәһең, һәм бынан ниндәйҙер ҡәнәғәтлек ала, тимәк.**

Шулай ҙа була: кемдер бындай "провокация"ға аңлы рәүештә, "эсе бошҡандан" ғына ла барыуы ихтимал. Социаль селтәрҙәге бәхәстәр, һеҙ әйткәнсә, әрләш, талашҡа әйләнеп, йәмһеҙләшә башлай икән, чаттың администраторына яуаплылыҡ төшөргә тейештер, ул бындай конфликт осраҡтарына ҡыҫылып, уны йәйларға, фекер алышыуҙы ыңғайға көйләп ебәрергә тейештер, тием. Һәр хәлдә лә интернет-хулигандарҙы дөйөм чаттарҙан һәм социаль селтәрҙән сығарып ебәреү өсөн дә күп кәрәкмәй, минеңсә. Тик бына күпселек осраҡтарҙа ана шундай йәмһеҙ ҡыланыусы әҙәмдәргә башҡаларҙың килешеп ҡарауы, ҡәтғи рәүештә уны "урынына" ҡуйырға, ауыҙын ябырлыҡ аҡыллы һүҙ әйтеп, туҡтатырға ынтылмауы аңлашылып бөтмәй. Күрәһең, чатта ҡатнашыусылар ипле-әҙәпле булһалар ҙа социаль йәһәттән пассив һәм битараф кешеләр. Ә бөгөн ундайҙар күпселекте тәшкил итә бара - шуныһы хәүефле.

**Кешеләрҙең ни өсөн негативҡа әйләнә барыуын мин тағы ла шунан да күрәм: заманыбыҙ кешеһе техноген цивилизация йәһәтенән үҫешә бара, ләкин шундай парадокс: рухи яҡтан, киреһенсә, һайыға бара. Бөгөнгө йәшәйештә халыҡ күпселек матди уңайлыҡҡа ынтыла, ә аң үҫеше менән ҡыҙыҡһынмай йә ул етерлек дәрәжәлә бармай. Рухи тарҡалыу кисергән әҙәмдәр ғәҙәттә йәмғиәт менән һыйышып йәшәй алмай башлай, ул һәр ваҡыт асыу һәм ҡәнәғәтһеҙлек белдерә һәм үҙен генә ҡайғырта. Матди аң кимәлендә йәшәүселәрҙең тормошҡа киңерәк ҡарашы ла, рухи йүнәлеше лә юҡ, шуға ла ундайҙар йәшәйешебеҙ закондарын, уның сәбәп һәм эҙемтә бәйләнештәрен, сәйәсәт, иҡтисади-социаль хәлен, үҫеш һәм көрсөк сәбәптәрен аңлауҙан алыҫ.**

Бындай хәлдән бөгөн кешене фәҡәт рухи-әхлаҡи йәһәттән ыңғайға үҙгәреш алыуы ғына ҡотҡарыр. Ҡөрьәндең 13-сө Әл-Рағд (Күк күкрәү) сүрәһенең 11-се аятында әйтелеүенсә, "...үҙе үҙгәрмәһә, халыҡ хәлен Аллаһ үҙгәртмәй."

*Фәүзиә* **МӨХӘМӘТШИНА** *яҙып алды.*

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЕРҘӘГЕ ОЖМАХ



**Балалар, уҡыусыларым, мәктәп алдында үҫеп ултырған ҡайынға текәлеп уйға батҡан. Ҡайынға ҡарап, баштарына ниндәй уйҙар килеүе тураһында инша яҙырға ҡушҡайным…**

Ҡырҡ ата балаһы ни тураһында уйлайҙыр, әлегә мәғлүм түгел. Ниндәй зифа ҡайын, тип һоҡланалыр, бәлки, берәһе. Икенсеһе, был ҡайынды тураҡлағанда дүрт-биш бағана сыға, тип фаразлайҙыр. Түмәрҙәргә бысып, ярып һатҡанда, биш мең аҡса эшләп була, тип, хаҡ ҡуйыусыһы ла барҙыр. Бәлки... Нинә балалар өсөн уйлайым әле, улар аҡыллыраҡ, һәр хәлдә, мәрхәмәтлерәк. Тормош бит һәр беребеҙҙең тәбиғәткә, эргә-тирәләребеҙгә ҡарата булған мөнәсәбәтебеҙҙән тора. Һинең ҡулыңда алтындан эшләнгән арыҫлан һыны. Ҡайһылай матур эшләнгән, тип һоҡланһаң, алтынды күрмәйәсәкһең. О, был бит алтын, тип иҫең китһә, арыҫланды күрмәйәсәкһең. Тормош шулай ҡоролған - Әлмисаҡтан алып Ахырға тиклем!

Был донъяла һәр беребеҙҙең әлмисағы һәм ахыры бар. 25 йәшендә миллионер булған, Apple компанияһына нигеҙ һалыусы Америка миллиардеры Стив Джобстың һуңғы һүҙҙәре тәрән уйға һала. Ул 56 йәшендә генә рактан ауырып үлә. Дауаханала ул ошоларҙы яҙып ҡалдырған: "Бизнеста мин ҙур уңышҡа өлгәштем. Әммә эштән башҡа артыҡ ҙур ҡыуаныстарым юҡ. Төптән уйлаһаң, байлыҡ - ул ғәҙәтемә әйләнгән факт ҡына. Әлеге мәлдә, ауырып йығылғас, үткән ғүмеремдә хәтерләйем һәм аңлайым: ҡотолғоһоҙ үлем алдында байлығымдың да, билдәлелегемдең дә бер мәғәнәһе лә юҡ.

Үҙегеҙҙе иркәләгеҙ, башҡаларҙы хөрмәт итегеҙ. Олоғайған һайын аҡылға ултырабыҙ һәм йәйлап аңлай башлайбыҙ: 30 долларлыҡ сәғәт тә, 300 долларлығы ла бер үк ваҡытты күрһәтә. Аҡса янсығыбыҙҙың хаҡы 30 доллар, йә 300 доллар булыуға ҡарамаҫтан, бер үк суммалағы аҡсаны һыйҙыра ала.

150 мең долларлыҡ автомобилдә лә, 30 мең долларлығында ла бер үк араны үтеп, тәғәйен урынға барып етәбеҙ.

300 квадрат метрлыҡ өйҙә лә, өс меңлегендә лә үҙеңде бер үк кимәлдә яңғыҙ тояһың.

Һеҙҙең ысын бәхетле булыуығыҙ был донъяның матди әйберҙәренә бәйле түгел.

Әгәр ҙә беренсе класлы йә эконом-класлы самолетта осһағыҙ ҙа, ул ҡолаһа, бергә ҡолайһығыҙ.

...Аңлаһығыҙ тип өмөт итәм, эргәгеҙҙә дуҫтарығыҙ, йә иһә һеҙҙе аңлаған кеше булһа, ысын бәхет - шул! Бәхәсһеҙ биш факт бар: балаларығыҙҙы бай бул, тип тәрбиәләмегеҙ, бәхетле булһын, тип ниәт ҡылығыҙ. Шулай булғанда, улар, үҫеп еткәс, әйберҙәрҙең хаҡын түгел, ҡиммәтен беләсәктәр.

Ашаған ризығығыҙ дарыу булһын. Шулай булмаһа, дарыуҙарҙы ризыҡ урынына ашарһығыҙ.

Кемдәр һеҙҙе ярата, бер ваҡытта ла ташламаҫ, хатта 100 процент сәбәптәре булһа ла, ир кешеме ул, ҡатын кешеме - һеҙҙе яңғыҙ ҡалдырмаҫҡа көс табасаҡ. Кеше булыу һәм кешелекле булыу араһында бик ҙур айырма бар. Алға тиҙерәк барғығыҙ килһә, яңғыҙ атлағыҙ! Йыраҡҡа юл тотһағыҙ, бергәләп барығыҙ!".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайынды күҙәткән балалар ни тураһында уйлай икән? Һеҙҙең баштан ниндәй уйҙар үтте? Тәбиғәткә, тирә-йүнгә, Аллаһы Тәғәләгә мөнсәбәтегеҙ ниндәй? Аңлайым, бөтәбеҙ ҙә бер иш уйламайбыҙ. Сөнки, әлеге лә баяғы, мөнәсәбәттәребеҙ менән айырылабыҙ. Ҡөрьәндәге Аллаһ һүҙҙәрен күңелебеҙ менән ҡабул итеп, бөтәбеҙ ҙә бер иш аңлаһаҡ, Әлмисаҡҡа ҡайтһаҡ, ҡайын һынын бер иш ҡабул итһәк, ерҙәге ожмах кире ҡайтыр һымаҡ...**

**Исмәғәзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика парламенты депутаттары Дәүләт Думаһына "Рәсәй Федерацияһы Еңәйәт-башҡарыу кодексының 103-сө статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектын индерергә планлаштыра, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте. Закон проекты язаға тарттырылған кешеләрҙе эшкә йәлеп итеүгә ҡағыла. Бынан алдараҡ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы Дәүләт Думаһына чайлдфри идеяларын пропагандалауҙы тыйыу тураһында закон проектын индерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәле башҡорт балеринаһы Тамара Шәһит ҡыҙы Хоҙайбирҙинаның тыуыуына 100 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Тамара Хоҙайбирҙина (1923-1998) - балерина, ул дәүләт эшмәкәре һәм журналист Шәһит Хоҙайбирҙиндың ҡыҙы, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы. Указға ярашлы, республикала ойоштороу комитеты төҙөлдә, уны Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев етәкләй.

✓Башҡортостанда "Бурыслы" операцияһы старт алды. Был хаҡта Башҡортостандың баш дәүләт автоинспекторы Владимир Севастьянов хәбәр итте. Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыны туктатып, уны мәғлүмәттәр базаһы буйынса тикшерә. Бынан алда һалынған штрафты түләмәгәнлеге асыҡланһа, административ материал төҙөлә. Судта гәйепләнә 15 тәүлеккә ҡулға алыуҙары ихтимал.

✓Һуңғы ваҡытта Сибай ҡала үҙәк дауаханаһы заманса яңы медицина ҡорамалдары менән тулылана. Ошо көндәрҙә дауаханала магнит-резонанс томографияһы эшләй башланы. Был - "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекттының "Йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә ҡаршы көрәш" төбәк проекттын ғәмәлгә ашырыу һөҙөмтәһендә күптән көтөлгән ваҡиға. Магнит-резонанс томографияһы организмдың ҡатмарлы ауырыуҙарын, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын хәүефһеҙ, ентекле, иртә стадияларҙа асыҡларға мөмкинлек бирәсәк.

✓ *Кәмендә 2025 йылдың тәүге яртыһына тиклем республиканың "Әр-Рәхим" мәсетен төҙәү эштәрен артабан дауам итеү өсөн аҡса бүлергә мөмкинлеге юҡ, тине Радий Хәбиров, ләкин объектты мотлаҡ төҙөп бөтәсәген вәғәҙәләне.*



ҠЫҪҠАСА

# МӘҘӘНИӘТ ӨЛКӘҺЕНӘ...

**Башҡортостан Башлығының "Башҡортостан Республикаһында дәүләт һәм муниципаль мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамы саралары тураһында"ғы Указына ярашлы, республикала ауылдарға йәки бәләкәй ҡалаларға эшкә ҡайтҡан мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә берәр миллион һум түләнә.** Документҡа ярашлы, 2023 йылда дәүләт йәки муниципаль мәҙәниәт учреждениелары йәки мәҙәниәт өлкәһендә өҫтәмә белем биреү учреждениеларының 30 хеҙмәткәренә берәр миллион һум күләмендә дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Түләүгә 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ауылға йәки бәләкәй ҡалаға эшкә ҡайтҡан белгестәр дәғүә итергә мөмкин. Аҡса биреү тәртибен бер ай эсендә әҙерләйҙәр. Бынан алдараҡ "Башинформ" Башҡортостанда йәш ғалимдарға йыл һайын 200 миллион һум күләмендә гранттар тапшырырға йыйыныуҙары хаҡында хәбәр иткәйне.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың иң яҡшы мәктәпкәсә белем биреү педагогтары өсөн премиялар тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Указдың тексынан күренеүенсә, "Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика һөнәри конкурсы һәм уның сиктәрендә уҙғарылған "Уҡытыу туған телдә алып барылған мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" конкурсы еңеүселәренә һәм лауреаттарына йыл да Башҡортостан Башлығының премиялары тапшырылырға тейеш. 50 мең һум күләмендәге премия юғарыла билдәләнгән конкурстарҙың ике еңеүсеһенә бирелә. Һәр конкурстың тағы дүрт лауреатына 30 мең һум аҡса тапшырыла. Премиялар мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларының иң яҡшы педагогик хеҙмәткәрҙәрен дәртләндереү маҡсатында булдырылған.

✓ **6 һәм 7 апрелдә Өфөнөң "Торатау" конгресс-холында "Юғарыға ос!" мәктәп форумы ойошторола.** Алты майҙансыҡта һәләтле балаларға һәм йәштәргә ярҙам итеү мәсьәләләрен, уҡытыусыларҙы аттестациялау системаһындағы үҙгәрештәрҙе, яңы белем биреү программаларын һәм мәктәпкәсә белем биреү өлкәһендә идара итеү хаҡында фекер алышыу планлаштырыла. Форумдың икенсе көнөндә, 7 апрелдә, педагогик белем биреү, маҡсатлы уҡытыу, инклюзив белем биреү темаларына, тәрбиә системаһына арналған тағы ла биш фекер алышыу майҙансығы ойоштоторола. Шулай уҡ балалар һәм йәштәрҙең "Беренселәр командаһы" ижтимағи-дәүләт хәрәкәтен ойоштороу өсөн муниципаль координаторҙарын уҡытыу буйынса стратегик сессия була. "Юғарыға ос!" мәктәп форумы фекер алышыу майҙансыҡтары вәкилдәренең пленар ултырышы менән тамамлана.

✓ **Өфөнөң "Толпар" шахмат клубы тәрбиәләнеүсеһе Урал Хәсәнов шахмат композицияһы буйынса Рәсәй чемпионатында бронза миҙал яуланы.** Йәш шахматсы 71 мәрәй йыйып, илдең яңы чемпионы, Санкт-Петербургтан 24 йәшлек гроссмейстер Алексей Поповтан һәм икенсе урынды алған Мәскәү гроссмейстеры Данил Павловтан бер нисә балға ғына ҡалышты. Урал Хәсәновҡа 16 йәш, әммә ул Рәсәйҙең иң яҡшы уйынсыларының береһе тип танылған. 2023 йылда спортсы Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә шахмат композицияһы буйынса донъя чемпионатында көмөш призёр булды. "Рәсәйҙең 33 шахмат композицияһы оҫтаһы сығыш яһаған чемпионатта бронза миҙал йәш талантлы спортсының юғары кимәлен тағы ла бер тапҡыр раҫланы", - тип белдерҙеләр "Башинформ"ға.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АУЫЛДАР КИЛӘСӘГЕ...

**Өфөлә "Агрокомплекс" халыҡ-ара күргәҙмәһе һәм Агросәнәғәт форумы асылды. Быйыл уның темаһы - "Рәсәй ауылының киләсәге". Күргәҙмәлә Рәсәйҙең 37 төбәгенән, шулай уҡ Ҡытайҙан, Ҡырғыҙстандан, Көньяҡ Кореянан, Төркиәнән, Белоруссиянан 340 экспонент ҡатнаша.**

Сараны Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры асты. Андрей Назаров билдәләүенсә, Рәсәйҙең ауыл хужалығы ғәйәт ҙур һәм тулы кимәлдә тормошҡа ашырылмаған ҡеүәткә эйә. Ә был форум агросәнәғәт комплексы проблемаларын һәм төп йүнәлештәрен тикшереү өсөн уңайлы майҙансыҡ булып тора. "Башҡортостанда 95 миллиард һумдан ашыулыҡ 60 инвестиция проекты ғәмәлгә ашырыла. Машина-транспорт паркы әүҙем яңыртыла - быйыл ауыл халҡы өсөн 3000-дән ашыу берәмек техника һатып алынған. Импортты алмаштырыу производствоһы үҫләштерелгән. Цифрлы технологиялар әүҙем индерелә. Беҙ - Рәсәйҙә ит, һөт, бал етештереү күләме буйынса алдынғыларҙың береһе, Волга буйы федераль округында иген етештереүселәр араһында тәүге өсәү иҫәбенә инәбеҙ", - тип билдәләне Премьер-министр.

Андрей Назаров махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәткән республика аграрийҙарының хеҙмәте хаҡында ла әйтте: "Махсус ылау менән яугирҙарыбыҙға кәрәкле продукция, экипировка, техника һәм ҡорамалдар оҙатыла. "Башсельхозтехника" дәүләт ауыл хужалығы предприятиеһында ошондай йөктәрҙе йыйып оҙатыу өсөн берҙәм логистик үҙәк эшләй. Улар тарафынан 67 гуманитар конвой оҙатылды".

# МӘСЕТКӘ БӘЙЛЕ...

**Башҡортостан Башлығы "Әр-Рәхим" мәсетенең бер көмбәҙе емерелеүгә бәйле ғәҙәттән тыш хәлгә үҙ фекерен белдерҙе.**

"Ошо ваҡиға тирәләй төрлө хәрәфәттәр йөрөй. Ислам, православие ҡанундарын аңламағандар юҡ-барға ышаныуҙың Исламда гонаһ икәнлеген асыҡ белергә тейеш. Шуға күрә әллә нәмәләр уйлап сығарырға кәрәкмәй. Ошондай объекттарҙы төҙәүгә ҡарата иғтибарһыҙлыҡ, илке-һалҡылыҡ йәки йүнһеҙлек кеүек төшөнсәләр ҙә бар бит", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығының инвестиция эшмәкәрлеге һәм инфраструктура проекттары буйынса кәңәшсеһе Ридаль Сәйетов ғәҙәттән тыш хәлдән һуң төҙөк манараларға төҙөлөш экспертизаһы үткәреү тәғәйенләнгәнен, талап ителгән осраҡта өс көмбәҙҙе лә нығытыу ҡаралғанын хәбәр итте. Емерелгән көмбәҙгә килгәндә, уны йүнәтеп булмай. Республика мосолмандарының Диниә назараты Волгодонскиҙан "Грант" инженер үҙәге йәмғиәте менән зыян күргән манара конструкцияһының өҫкө өлөшөн эшләүгә юридик килешеү төҙөгән. Ридаль Сәйетов был көмбәҙҙең ни сәбәпле ҡолағанын да әйтте. "Сәбәптәре бер нисә булырға мөмкин: тәүгеһе - ҡуйған ваҡытта конструкцияны боҙоу, икенсеһе - тамамланмаған төҙөлөш объекты төҙөлөш нормалары һәм ҡағиҙәләре талаптарына ярашлы консервацияланмаған", - тине ул.

Кәмендә 2025 йылдың тәүге яртыһына тиклем республиканың "Әр-Рәхим" мәсетен төҙәү эштәрен артабан дауам итеү өсөн аҡса бүлергә мөмкинлеге юҡ, тине Радий Хәбиров, ләкин объектты мотлаҡ төҙөп бөтәсәген вәғәҙәләне.

# АБЫНҺАҢ ДА, АЛҒА БАР!

**Күнекмәләр тамамланғандан һуң "Салауат Юлаев" хоккей клубы Башҡортостан ҡалалары һәм районлары буйлап турға юллана. Команда уйынсылары муниципалитеттарҙа йәш хоккейсылар өсөн оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә, автограф-сессияларҙа ҡатнашырға һәм көйәрмәндәр менән осрашырға йыйына.**

Был хаҡта хоккей клубы етәкселегенең, тренерҙар штабының һәм уйынсыларҙың Радий Хәбиров менән осрашыуынан һуң билдәле булды. Республика етәксеһе командаға даими чемпионат өсөн рәхмәт белдерҙе. "Салауат Юлаев" уны Континенталь хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһында икенсе урында тамамланы.

- Иң мөһиме, һеҙ аҙаҡҡаса көрәштегеҙ, көйәрмәндәрҙе шәп уйын менән ҡыуандырҙығыҙ. Команда өсөн еңел булмаған осорҙа һеҙ яҡшы ҡаҙаныштар күрһәттегеҙ. Дәғүәсенең көслө булғанын аңлайым. Ни өсөн еңелдегеҙ, һеҙгә бына шуны анализларға кәрәк. Әммә тормошта шулай: бер тапҡыр абынһаң, тиҙерәк тороп баҫып, артабан барырға кәрәк. Мин ошо принцип буйынса йәшәйем. Һеҙ ҙә шулайҙыр тип ышанам. Төшөнкөлөккә бирелергә кәрәкмәй. Һабаҡ алғас, артабан алға барырға кәрәк. Республикабыҙ халҡы һеҙгә ышана, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

"Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры Ринат Бәширов һүҙҙәренсә, коллектив алда ниндәй бурыстар торғанын аңлай. "Әлбиттә, уҙған миҙгел әүҙем булды тип әйтә алмайбыҙ, сөнки ҙур өмөт бағлағайныҡ. Егеттәрҙең дә кәйефе юҡ. Командабыҙҙан сит ил вәкилдәре китте. Әммә беҙҙә йәш уйынсылар бар. Миҙгелдең беҙҙең өсөн һынылышлы буласағын аңлай инек", - тип билдәләне Ринат Бәширов. Команда капитаны Григорий Панин да йәш хоккейсыларҙың мөмкинлектәрен юғары баһаланы, уны яңы миҙгелдә тормошҡа ашырырға кәрәк буласағын билдәләне.

# СТУДЕНТҠА - ЯРҘАМ

**Башҡортостанда туғандары махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан студенттарға булышлыҡ итеү буйынса ситуация үҙәге эшләй башланы.**

Ул ауыр тормош хәлендә ҡалған һәм йәмғиәттең, дәүләттең өҫтәмә ярҙамына мохтаж студенттарға адресы социаль ярҙам өсөн республика юғары уҡыу йорттары ректорҙары советының ҡарары буйынса булдырылды. Хәбәр ителеүенсә, үҙәк республиканың юғары уҡыу йорттары ресурстарын берләштерә, бер нисә йүнәлеш буйынса студенттарға, хеҙмәткәрҙәргә ярҙам күрһәтеү ҡарала. Мәҫәлән, мобилизацияланған граждандарҙың ғаиләләренә юридик яҡтан ярҙам итеүҙе Өфө фән һәм технологиялар университеты контролдә тота. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты белгестәре телефон аша психологик ярҙам күрһәтә. Ирекмәнлек эшмәкәрлеге өсөн Башҡорт дәүләт медицина университеты яуаплы. Мобилизацияланғандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн гуманитар ярҙам йыйыу менән Башҡорт дәүләт аграр, Өфө нефть университеттары вәкилдәре шөғөлләнә. Ситуация үҙәгенә 8 (800) 550-67-01 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин. Колл-үҙәк эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 5-кә тиклем эшләй.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Быйыл Өфөлә 11-се класты тамамлаусылар өсөн һуңғы ҡыңғырау 19 майҙа яңғырай. Тейешле бойороҡҡа баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев ҡул ҡуйған. Өфөнөң район хакимиәттәренә, ҡала йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәгенә, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө буйынса идаралығына, баш ҡаланың янғын һағы идаралығына һәм башҡа кҙәтеү ведомстволарына 11-се класты тамамлаусылар өсөн "Һуңғы ҡыңғырау" байрамын үткәргәндә "уҡыусыларҙың ғүмерен һәм һаулығын һаҡлау, балиғ булмағандар араһында хоҡуҡ боҙоу осраҡтарына юл ҡуймау буйынса саралар күрергә" ҡушылды.

✓Өфөлә 167-се Өфө ағас эшкәртеү комбинаты - Башҡортостан сәскәләре торлаҡ комплексы һәм 258-се Көмөш шишмә - Өфө ағас эшкәртеү комбинаты маршруттарында юл хаҡы ҡиммәтләнде. Был турала мэрия алдан хәбәр иткәйне. Уларҙың беренсеһендә хәҙер юл хаҡы ҡулаҡса йәки банк картаһы менән иҫәпләшкәндә - 35 һум, ә "Алға" картаһы менән түләгәндә - 30 һум. Икенсеһендә - барлыҡ түләү ысулдары менән 35 һум.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте 9 майҙа "Үлемһеҙ полк" акцияһын үткәрергә әҙерләнә башланы. Ҡала властары алдында быйыл 170 мең кеше ҡатнашҡан сараның графигын, мәҙәни программаһын һәм хәүефһеҙлек сараларын билдәләү бурысы тора. Октябрь проспектын ябыуға бәйле шәхси һәм йәмәғәт транспортының урау хәрәкәтен ойоштороу мәсьәләһе тикшерелә. Әйткәндәй, 2022 йылдың 9 майында республикала 487 мең кеше Бөйөк Ватан һуғышында еңеү яулағандарҙы хөрмәтләп иҫкә алыу өсөн "Үлемһеҙ полк" сафына баҫты.

✓Башҡортостан боксёры Иван Тихонов "Адриатика ынйыһы" донъя кубогында Рәсәй йыйылмаһы составында сығыш яһаны һәм 63,5 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында бронза миҙал яуланы. Көслө боксёрҙар турниры Черногорияла үтте. Рәсәй йыйылмаһы "Адриатика ынйыһы"нда бөтәһе 14 алтын, туғыҙ көмөш һәм алты бронза миҙалға лайыҡ булды.

✓27 марттан Utair Өфө - Минеральные Воды маршруты буйынса осоштар башлай, тип хәбәр иттеләр авиакомпанияның матбуғат хеҙмәтенән. Рейстар аҙнаһына ике тапҡыр - дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә башҡарыла. Билет хаҡы 4 485 һумдан башлана. Юлға 3 сәғәт 10 минут ваҡыт китә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Беҙ, мәҫәлән, экология, сауҙа, эшҡыуарлыҡ, төҙөлөш, медицина, фән, спорт һәм журналистика буйынса бәйләнештәрҙе киңәйтеүгә өлгәштек. Әлеге ваҡытта Башҡортостан вуздарында ҠХР-ҙың 98 гражданы белем ала.*



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# ЯҢЫРЫУ ҺӘМ ТАҘАРЫУ ОСОРО

**Өфө ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә төп иғтибар яҙғы мәшәҡәттәргә арналды. Хәйер, мәшәҡәттәр тиһәң дә, улар йыл да ҡабатланып торған бурыстар - юлдарҙағы соҡор-саҡырҙарҙы ямау, ташҡын алдынан ямғыр ағыҙыу системаһы торошон тикшереү, яҙғы ташҡын, ағас ултыртыу һ.б.**

Әммә ошо мәсьәләләр араһында айырым иғтибар талап иткәндәре лә бар. Быйыл, мәҫәлән, Ағиҙел аръяғы территорияһында инженер инфраструктураһын үҫтереүгә бәйле Киров һәм Дим районДарында һыу торбалары һалыу ҡаралған. Граждандарҙы бигерәк тә Киров районы ҡыҙыҡһындыра, сөнки был район территорияһы аша ҡала ситендәге ауылдарға юл үтә һәм, мәғлүм булыуынса, бында, аныҡлап әйткәндә Пугачев урамында, юл сиселеше төҙөлөүгә бәйле, транспорт урау юлдан йөрөй. Һыу үткәргес тә Пугачев һәм Колгуев урамы эргәһенән үтергә тейеш һәм Колгуев урамы 15 апрелдән 31 августҡа тиклем ябыла.

Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, һыу үткәргес - мөһим стратегик объект. Шуға ҡарамаҫтан, юлды ябыу бер ни тиклем уңайһыҙлыҡ та тыуҙырасаҡ. Уларҙы мөмкин тиклем кәметеү маҡсатында мэр төрлө варианттарҙы, шул иҫәптән ваҡытлыса урау юл һалыу мөмкинлеген дә, ҡарарға ҡушты.

Икенсе мөһим мәсьәлә Рәсәйҙә иғлан ителгән Уҡытыусы һәм остаз йылына ҡағылды. Ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин белдереүенсә, йыл сиктәрендә педагогтар өсөн бик күп файҙалы саралар ҡаралған, әммә мөғәллимдәр быйылғы йылдан уҡытыусының юғары статусының һәм йәмғиәттә улар хеҙмәтенең әһәмиәте танылыуына өмөт итә.

Тәбиғәткә килгәндә, ҡыш үҙенең тәхетенән китергә теләмәй, ҡыртлашып ҡараһа ла, яҙ ҙа ергә иркенләп аяҡ баҫырға тырыша. Ә яҙ - ул яңы хәстәрҙәр, һәм тәү сиратта - ташҡынға әҙерлек. Һыу баҫыу хәүефе янаған территориялары булған районДар башлыҡтары (Калинин, Киров) үҙ районДарының был һынауға тулыһынса әҙер булыуын белдерҙе.

Һәр йыл апрелдең һуңғы декадаһында Өфөлә "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһы үтә. Быйыл ул 22 апрелдән 13 майға тиклем дауам итәсәк. Ҡала хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы урынбаҫары Азамат Ғәбделсәлимов белдереүенсә, 2064 төп ағас һәм 2700 ҡыуаҡ ултыртыу өсөн 102 ихатала һәм 63 йәмәғәт киңлегендә 164 урын билдәләнгән. 8 урында яңы аллеялар барлыҡҡа киләсәк.

Ғөмүмән, яҙ - ул яңырыу, үҙгәреү, таҙарыу осоро, сөнки бар тереклек уяна, ерҙе ҡыш буйына ҡар аҫтында ятҡан сүп-сарҙан таҙартыу маҡсатында санитар өмәләр башлана...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ҠЫТАЙ ДИУАРЫ...

## Кремль диуарына яҡынайҙы



**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Ҡытай Халыҡ Республикаһы рәйесе Си Цзиньпиндың Мәскәүгә визитын шулай тип баһаланы. "Ҡытай диуарынан Кремль диуарына тиклем - меңдәрсә километр, әммә Пекин менән Мәскәү араһындағы сәйәси дистанция ныҡ ҡыҫҡарҙы", - тип яҙҙы ул үҙенең социаль селтәрҙәге аккаунтында.**

Вазифаһына һайланғандан һуң Ҡытай лидерының был сит илгә беренсе визиты. "Бындай тиҙ арала яҡынайыуға Америка "ҡамсыһы"ның ысулы этәреүе бәхәсһеҙ, - ти Андрей Назаров. - Вашингтон баҫым, янау һәм ультиматумдар сәйәсәтен һайлап, Ҡытайҙы 180 градусҡа борҙо, ҠХР-ға сауҙа һуғышы иғлан итеп, үҙ бизнесына юл япты. Байден хакимиәте Ҡытай сәнәғәтенә, экспортына санкциялар иғлан итеүен дауам итә, ҡытайҙарға электроника, чиптар һәм шундай технологиялар өсөн ҡорамалдар һатыуға тыйыу индерә.

АҠШ беҙҙең илгә ҡарата ла тап шундай схема буйынса эш итә. Һөҙөмтәлә иҡтисади һәм тәбиғи ресурстарға бай ике ҡеүәтле держава (Рәсәй менән Ҡытай) берләште һәм Аҡ йорттоң асыулы сығыштарына иғтибар ҙа итмәйенсә, үҙ мөнәсәбәттәрен ҡора. Беҙ ошо киң ҡоласлы партнерлыҡ проектының бер өлөшө булыуыбыҙға шатбыҙ. Республика Ҡытай менән 1999 йылдан алып әүҙем эш алып бара. Ул ваҡытта беҙ Ляонин провинцияһы менән сауҙа-иҡтисад һәм фәнни-техник хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөгәйнек. 20 йыл эсендә бәйләнештәрҙе тағы ла киңәйттек: бөгөн Башҡортостан ҠХР-ҙың биш эре провинцияһы менән хеҙмәттәшлек итә. 2021 йылда үҙ-ара тауар әйләнеше 985,7 миллион долларға етеп, 2020 йыл менән сағыштырғанда 5 процентҡа күберәк булды. Былтыр Ҡытай Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә беренсе урын алды. Сауҙа әйләнеше күләме 1,2 миллиард долларға тиклем күтәрелде. Экспорт - 871, импорт 361 миллион доллар тәшкил итте.

2022 йылдың 16 декабренән алып Ҡытай Халыҡ Республикаһында Рәсәй Сауҙа вәкиллеге ҡарамағында Башҡортостан вәкиле эшләй. Ул Ҡытайҙа башҡорт бизнесын үҫтереүгә, шул иҫәптән эшлекле бәйләнештәр булдырырға, урындағы ҡануниәтте һаҡларға, тауар һатыу баҙарын һәм каналдарын табырға ярҙам итә. Быйыл унда рәсми делегация менән барыу мөмкинлеген ҡарайбыҙ. Ҡытай эшҡыуарҙары үҙ капиталына Башҡортостандың туғыҙ предприятиеһын индерҙе. Делегациялар үҙ эш йүнәлештәре буйынса тәжрибә уртаҡлашты. Беҙ, мәҫәлән, экология, сауҙа, эшҡыуарлыҡ, төҙөлөш, медицина, фән, спорт һәм журналистика буйынса бәйләнештәрҙе киңәйтеүгә өлгәштек. Әлеге ваҡытта Башҡортостан вуздарында ҠХР-ҙың 98 гражданы белем ала, республика вуздары Ҡытайҙың тиҫтәләгән абруйлы уҡыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итә, уларҙа беҙҙең студенттар стажировка үтә.

Си Цзиньпиндың Мәскәүгә визиты Рәсәй-Ҡытай мөнәсәбәттәренә яңы һулыш өҫтәренә ышанам, ә ике лидерҙың һөйләшеүҙәрен бөтөн донъя күҙәтә".

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ОҪТАЛАР...

## Башҡортостан картаһын сигергә ултырҙы

**Республикала "Башҡортостандың сигелгән картаһын" булдырыу буйынса эш башланды. Уны Республика халыҡ ижады үҙәге, республиканың муниципаль берәмектәре һәм оҫталар бергәләп эшләйәсәк.**



Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, карта тулыһынса сигелеп эшләнәсәк.

1,5 метрҙан 2 метрға тиклем үлсәмдәге туҡымала муниципалитеттарҙың тәбиғәт ҡомартҡылары ғына түгел, ә уларҙа йәшәгән халыҡтарҙың уникаль традицияларын да күрергә мөмкин буласаҡ.

- Проект өҫтөндә Өфөнән һәм муниципалитеттарҙан оҫталар төркөмө эшләйәсәк. Һәр район үҙ макетын әҙерләй, унда ул муниципалитеттың үҙенсәлеген сағылдырырға тейеш. Муниципаль берәмектәрҙең атамалары картала күрһәтелмәйәсәк һәм был ниндәй район икәнен һүрәт буйынса ғына аңларға мөмкин буласаҡ, - тип аңлатты проектты төҙөүселәр.

Эштә сәйлән, мулина, кейеҙ, күн, ярым аҫыл таштар, тәңкәләр һәм төрлө сигеү техникаһы кеүек материалдар файҙаланыласаҡ. Карта бер тотош полотноға сигеләсәк.

Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫы йылы тип иғлан ителгән 2022 йылда, "Рәсәй Федерацияһының сигелгән картаһы" масштаблы акцияһы тормошҡа ашырыла, унда илебеҙҙең бөтә төбәктәре, шул иҫәптән яңылары ла ҡатнаша. Карта июнь айында Сыуашстан Республикаһының Чебоксар ҡалаһында Беренсе Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһы сиктәрендә тәҡдим ителә.

2022 йылдың көҙөндә Сыуашстандан коллегалар Рәсәй төбәктәренең сигелгән карталары фестивален ойоштороу тураһында тәҡдим индерә, уны төбәктә 2023 йылдың авгусында үткәреү планлаштырыла. Тәҡдимде В.Д. Поленов исемендәге Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто хуплай һәм бер нисә Рәсәй субъекты, шул иҫәптән Республика халыҡ ижады үҙәге лә был йүнәлештә эш башланы ла инде.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сысҡан кәрешкәһе

❖ Вируслы гепатит булғанда 1 балғалаҡ киптерелгән сысҡан кәрешкәһе (горошек мышиный) тамырына 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнар хәлгә еткерергә һәм тағы 5-6 минут талғын утта тоторға. 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр сирек стакан йәки стакандың өҫтән бер өлөшөн эсергә.

❖ Ҡан аҡҡанда, йүткергәндә 3 ҡалаҡ кипкән үләнгә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был төнәтмәнән шулай уҡ яраны уңалтыу өсөн сылатҡыс яһарға ла була.

### Баҡса борсағы

❖ Баш йыш ауырығанда баҡса борсағы (горох посевной) онон көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр балғалаҡ йоторға.

❖ Дерматит йәки ҡыҙылса (корь) булғанда эмалле кәстрүлгә (китеге булмаһын) тултырғансы баҡса борсағы үләне һәм орлоғо һалып, ҡаплағансы ҡайнар һыу ҡойорға, төнәтергә. Тирегә сыҡҡан сабыртмаларға сылатҡыстар яһарға, кипһә, яңыртырға. Тире бер нисә көндән таҙара башлай.

### Ҡара көртмәле

❖ Аҡ ҡанлылыҡтан 6 ҡалаҡ ҡара көртмәле япрағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне 1 ай дауамында тигеҙ ваҡыт араларығы ҡалдырып көнөнә 5-6 стакан эсергә. Шунан 10 көнгә туҡталып тороп, кире ҡабатларға.

❖ Гипертония осрағында 4 балғалаҡ ҡара көртмәле емешенә бүлмә температураһындағы 1 стакан һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Көн дауамында бүлеп-бүлеп эсеп бөтөргә.

### Тары

❖ Гипертония осрағында 3 ҡалаҡ тарыны йыуып, киптереп, киләлә төйөргә һәм һыу ҡушып эсмәй, көн дауамында ашап бөтөргә. Ҡан баҫымы 3-4 айҙа оҙаҡҡа яйға һалына. Тары онон күп итеп алдан әҙерләп ҡуйыу кәрәкмәҫ, сөнки ул тиҙ боҙола. Гипертониянан шулай уҡ тары ярмаһын сәй кеүек бешереп эсергә лә була, ул да ҡан баҫымын яйға һала.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Күптәренең атайҙары махсус хәрби операцияла. Ул балалар, һис шикһеҙ, атайҙарын һағына торғандарҙыр. Улар менән атайҙарса ла, педагог булараҡ та аралашырға тура килә Радик Шамил улына.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Көмөш

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре (селтәр, яға, һаҡал һ.б.) формаһы, төҙөлөшө йәһәтенән бер-береһенән һиҙелерлек айырылып торһа ла, ҡулланылған материалдары йәһәтенән уртаҡ һыҙаттарға эйә. Иң йыш осрағандары араһынан көмөш аҡса, мәрйен, аҡыҡ, мәрүәт кеүектәрен айырым билдәләргә мөмкин.

Көмөш - күп кенә төрки телдәр өсөн хас булған һүҙ. Ҡайһы бер ғалимдар был һүҙҙең килеп сығышын боронғо ҡытай теле менән бәйләй. Гөмүмән алғанда, уның нигеҙендә көм (kim) "металл, алтын" элементын айырып ҡарайҙар. Донъя халыҡтарының күбеһе алтынды ирҙәр енесе менән бәйләһә, көмөштө ҡатын-ҡыҙ металы тип иҫәпләй. Ул шулай уҡ күктәге ай менән дә туранан-тура бәйле. Мәҫәлән, боронғо Һиндостанда көмөштө айҙың күҙ йәштәре тип ҡабул иткәндәр. Күп халыҡтар элек-электән был металдың сихри көскә эйә булыуына ышанып, уны һаҡланыу сараһы булараҡ ҡулланыр булғандар. Мәҫәлән, Рим империяһындағы ҡанбабалар баҫҡынсыларҙан һаҡланыу өсөн ил йәки айырым ҡала тирәләй көмөш һындарҙы ергә күмеп сыҡҡандар.

Башҡорттарҙың да борон-борондан көмөштөң көсөнә ышанғанлығы төрлө сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан. Айырыуса, был металды им-том йолаһында осратырға мөмкин. Мәҫәлән, кеше тәңкә йәки түңәрәк тимрәү менән ауырығанда шундай исулға мөрәжәғәт иткәндәр: көмөш аҡсаны йоҡа бысаҡ менән ҡырып, көмөш порошок һипкәндәр. Шуны ҡаймаҡ менән бутағандар ҙа тимрәүле урынға һөрткәндәр. Шулай уҡ тәндең тимрәүле еренән көмөш аҡсаны шыуҙырып йөрөткәндәр ҙә: "бөтһөн, ҡороһон (фәлән кешенең) тимрәүе", - тип өс мәртәбә ҡабатлағандар. Һары ауырыуын дауалағанда кеше табаҡтағы һыуға сабаҡ ебәреп, шуға ҡарап ултыра, балыҡ өйәҙәп (ауып) китеп үлә. Ауырыу ауыҙына көмөш тәңкә ҡабып ултыра. Аҙаҡ уны түшенә баҫа. Көмөш ҡулланыуҙы "Каш һыҙыу йолаһы"нда ла күрәбеҙ: ҡашы матур үҫһен тип, сабыйҙың ҡашын көмөш тәңкә менән һыҙып сығалар ҙа: "һыҙылып үҫһен, аҡ уйлы булһын!" - тип теләк теләйҙәр. Көмөштө туй йолаһы менән бәйле күренештәрҙә лә осратабыҙ. Мәҫәлән, "Килен күреү йолаһы"нда ҡәйнә кеше башлап һүҙ әйтер булһа, килененең усына һумлыҡ көмөш тәңкә һалып теләк әйтә:

- Юлың тәңкәле булһын
Көтөүең тәкәле булһын...

Ҡыҙҙың сеңләүҙәрендә лә ағаһы биргән көмөш һумлыҡ тураһында һүҙ бара:

Сапсаҡ та сапсаҡ аҡ борсаҡ,
Ағасайым бармай, башламам.
Ағасайым биргән һумлыҡты,
Биҙәккәйе бөтмәй ташламам.

Йола буйынса ҡоҙаларҙы оҙатҡандың икенсе көнөнә ҡыҙҙың атаһы йәш-елкенсәк, ҡыҙ-ҡырҡын һәм килендәрҙе "Карта ашы"на саҡыра. Килгән ҡунаҡтар башҡа төр әйберҙәр менән бер йәһәттән һаҡал, ҡашмау һәм өсөн тәңкәләр алып килә. Бүләк итә торған тәңкәләрҙе еңгәләр күтән итенә, ҡарынға, йылҡының ҡартаһына ҡушып, ҡалаҡҡа һалып бирәләр. Быларҙың барыһы ла ҡыҙға әсәлек бәхете теләү менән бәйле.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән аңлашылыуынса, селтәр, яға, һаҡал һ.б. биҙәүестәрҙә көмөштөң киң ҡулланылыш алыуы юҡҡа ғына түгел. Халыҡ борондан уҡ был металдың сихри көсөнә ышанып, уны биҙәүестең мөһим бер элементына әйләндергән.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨЛГӨРҘӘР ӨЛГӨЛӨ БУЛА

**(Башы 1-се биттә).**

Һай, оҫта бейейҙәр бит, күҙ теймәгерҙәр! Кемдәр улар ил үҙәгенең төп майҙанында тыпыр баҫыусылар? Яуап шундай: Баймаҡ ҡалаһының Радик Бакиров етәкселегендәге "Саптар" өлгөлө балалар хореография студияһы бейеүселәре улар! Өлгөлө ансамблдең өлгөр бейеүселәре!

Беҙ, тамашасылар, тамаша ҡылып һоҡланыу менән генә сикләнәбеҙ, ә бит өлгөлө студия исеменә лайыҡ булыу, артабан мәртәбәле дәрәжәне саф килеш һаҡлау өсөн күпме хеҙмәт, сабырлыҡ кәрәклеге тураһында уйлап та бирмәйбеҙ. Бында төп көс ансамбль етәксеһе Радик Бакиров иңенә төшәләр.

Күгәрсен районының Моҡас ауылында тыуып, мәктәпте Баймаҡта тамамлаған Радик ҡулына өлгәргәнлек аттестаты алғас, оҙаҡ уйламай, Стәрлетамаҡҡа бейеүсегә уҡырға китә. Һөнәр алғас, һигеҙ йыл Борайҙа мәҙәниәт йортонда эшләй. Шул осорҙа ул өс бейеү ансамбле төҙөп, шуларҙы етәкләй. 2013 йылда Баймаҡҡа Халыҡ ижады йорто директоры булып эшкә ҡайта. Ике йылдан тәжрибә туплау өсөн Татарстанға сығып китә һәм Сарман районында мәҙәниәт йорто директорының иждад буйынса урынбаҫары булып эшләй, режиссер ҙа була, сценарийҙар ҙа яҙа, бейеп тә ала, йәғни сәнғәт хеҙмәткәрҙәренә таныш булған тынғыһыҙ хеҙмәт юлын үтә.

Кире Баймаҡҡа әйләнеп ҡайтҡас, "Саптар" бейеү ансамбленең яҙмышы башлана һәм һигеҙ йыл дауам итә. Мәскәүҙә үткән Бөтә Рәсәй бейеү фестивалендә беренсе урын алыу ҙур хеҙмәттең лайыҡлы бер һөҙөмтәһе булып тора ла инде.

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Радик Бакиров әйтеүенсә, "Саптар" бейеү ансамблендә 4 йәштән алып 15 йәшкә тиклем 250-нән ашыу бала шөғөлләнә. Күптәренең атайҙары махсус хәрби операцияла. Ул балалар, һис шикһеҙ, атайҙарын һағына торғандар. Улар менән атайҙарса ла, педагог булараҡ та аралашырға тура килә Радик Шамил улына, шуға ла балаларҙың әсәйҙәре, өләсәйҙәре уға үҙҙәренең сикһеҙ рәхмәтен еткерә.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МАНСУР ГРАНИТЫ...


СВИДЕТЕЛЬСТВО
об исключительном праве
на географическое указание
№ 305/1

МАНСУРОВСКИЙ ГРАНИТ

Правообладатель: *Акционерное общество «Уральские камни», 453701, Республика Башкортостан, Учалинский район, г. Учалы, ул. Энергетиков, 33 (RU)*

Заявка № 2021755984
Дата подачи заявки: 02 сентября 2021 г.
Дата государственной регистрации представления исключительного права на географическое указание в Государственном реестре географических указаний и наименований мест происхождения товаров Российской Федерации: *01 марта 2023 г.*
Дата истечения срока действия свидетельства: *02 сентября 2031 г.*

*Руководитель Федеральной службы по интеллектуальной собственности*

Ю.С. Зубов

**Роспатент Башҡортостандың Учалы районында сығарылған Мансур граниты брендын теркәгән. "Мансур граниты"н географик күрһәтмә сифатында теркәү тураһында "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте.**

Мансур граниты - Башҡортостандың "географик күрһәтмә" статусына эйә булған тәүге төбәк бренды, тип билдәләне сенатор. Әлегә тиклем республикала "тауар сығарылған урындың атамаһы" сифатында алты бренд теркәлгәйне. Улар - Башҡорт балы, Ҡурай, Бөрйәндең солоҡ балы, Асы, Ҡорғаҙаҡ һәм Йоматау минераль һыуҙары.

- Төбәк брендтары - бик мөһим инструмент. Тәү сиратта, төбәктәр өсөн. Традицион тауарҙарҙы күрһәтеү, инвестициялар йәлеп итеү һәм туризмды үҫтереү, төбәкте танытыу өсөн кәрәк был. Был тема Федерация Советының көн тәртибендә ныҡытылды, уға Федерация Советы Рәйесе Валентина Ивановна Матвиенко етди иғтибар бирә һәм был процесты үҙенең контролендә тота. Уның ҡушыуы буйынса субъекттарҙың үҙенсәлекле тауарҙарын асыҡлау һәм теркәү йәһәтенән эште дауам итәбеҙ. Төбәк брендтарын тауар сығарылған урындың атамаһы һәм географик күрһәткес сифатында теркәү - тауарҙың үҙенсәлектәрен һәм юғары сифатлы булыуын раҫлау ҙа ул. Сөнки теркәү өсөн тауарҙың уникаль үҙенсәлектәргә эйә булғанын һәм аныҡ биләмәгә хас традицион әҙерләү алымы барлығын иҫбатларға кәрәк бит. Башҡортостан тауар етештереүселәренең ошо мөмкинлектәрҙе аңлауы һәм файҙаланыуы өсөн бик шатмын", - тип яҙған Лилиә Ғүмәрова.



**Белешмә:** Мансур яткылығы граниттары аҡһыл һоро төҫтә, бер төрлө эре бөртөклө, ярыҡтары аҙ, декоратив, ныҡлығы юғары һәм һиуыҡҡа сыҙамлы. Барлыҡ төр төҙөлөш эштәрендә ҡулланыла.

**✓ *Филиппов ҡурғаны Көньяҡ Уралдың ошо типтағы йөҙәрләгән ҡурғандарының береһе ул. Улар Баймаҡ, Хәйбулла һәм Башҡортостандың башҡа көньяҡ райондарында бик күп.***

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы

Шуныһы иҫ китмәле, Филиппов ҡурғаны табылдыҡтарының абсолют күпселеге шул уҡ дәүергә ҡараған Себер, Ҡаҙағстан һәм Көнсығыш Европаның көньяҡ өлөшө ҡурғандары табылдыҡтары формаларын ҡабатлай. Уларҙың бер үк һөнәр үҙәктәрендә эшләнеүе һәм мәҙәни яҡтан ҡәрҙәш ҡәүемдәр араһында таратылыуы шик тыуҙырмай. Шундай үҙәктәрҙең береһенең Көньяҡ Уралда, Көньяҡ һәм Көнбайыш Ҡаҙағстан территорияһында булыуы мөмкин. Филиппов ҡурғанында яһалған асыш Көньяҡ Уралдың боронғо тарихын өйрәнеү йәһәтенән донъяуи әһәмиәткә эйә. Был төбәктең дах-массагет ҡәбиләләрендә бөткөһөҙ хазиналарға эйә булған кешеләр булыуын ышаныслы рәүештә раҫлаусы факт. Әгәр табылған предметтарҙың байлыҡтың бары тик алтынлата сағылышы ғына булыуын һәм улар артында меңәрләгән баш мал-тыуар, меңләгән бәйле кешеләр һәм икһеҙ-сикһеҙ ер биләмәләре булыуын иҫәпкә алһаҡ, б.э. тиклем V - III быуаттарҙа ниндәйҙер бер кешенең ырыуҙаштары һәм, бәлки, Көньяҡ Уралдың барса халҡы өҫтөнән ниндәй ғәмәли власть тотоуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Алтын, көмөш, бронза предметтарҙың һаны һәм төрҙәре, уларҙы эшкәртеүҙәге юғары художество оҫталығы буйынса Филиппов ҡурғанын ул замандағы Евразия күскенселәренең иң аҫыл ҡомартҡылары рәтенә ҡуйып була.

Филиппов ҡурғаны Көньяҡ Уралдың ошо типтағы йөҙәрләгән ҡурғандарының береһе ул. Улар Баймаҡ, Хәйбулла һәм Башҡортостандың башҡа көньяҡ райондарында, Ырымбур тарафтарында һәм Силәбе өлкәһендә бик күп. Ҡаҙағстандың Урал өлкәһендә бейеклеге 18 м, диаметры 160 м ҙурлыҡ ҡурған булыуы билдәле. Филиппов ҡурғаны менән сағыштырһаҡ, уларҙың барыһының да иртә тимер быуатына ҡараған иртә күскенселәр дәүләтенең иң арҙаҡлы шәхестәре ҡәберҙәре өҫтөнә ҡоролған ҡомартҡылар булыуын раҫларға мөмкин. Әммә, дах-массагет һәм исседон йәмғиәтенең иртә синфи характерҙа икәнлеген, уларҙың үҙҙәренең дәүләти берләшмәләре булыуын таныған хәлдә лә, Көньяҡ Уралдың үҙаллы мәҙәни-сәйәси үҙәк булараҡ әһәмиәтен арттырып күрһәтеү дөрөҫ булмаҫ ине. Көньяҡ Уралдың малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе ҡәбиләләренең үҙҙәренең мәҙәниәтенең характеры, көнкүреше һәм сығышы буйынса Ҡаҙағстан, Арал алды-Каспий далалары күскенселәренең бер өлөшө булыуы шарттарында ижтимағи үҫеш кимәленең юғарылығын ошо төбәк халыҡтарының уртаҡ ҡаҙанышы итеп ҡарау фарыз. Ул заманда уҡ, һауа шарттарына бәйле, ат көтөүҙәрен көньяҡтан төньяҡҡа һәм кирегә табан күсереп йөрөтөүгә нигеҙләнгән малсылыҡ хужалығын алып барыу өсөн Көньяҡ Урал далаларының тейешле объектив фактор икәнлеген иҫәпкә алыу ҙа ошолай итеп фекер йөрөтөргә нигеҙ булып тора.



*15-се һүрәт. Филиппов ҡурғаны материалдары буйынса ҡоралды күскенсе-яугир кейеменең реконструкцияһы (Л. Т. Яблонский буйынса).*

### Көньяҡ Уралдың урман һәм урман-дала зонаһы ҡәбиләләре

Йәшәгән ерҙәренең физик-географик шарттары төрлөсә булыуы төбәк халыҡтарының йәшәү рәүешендә һәм матди мәҙәниәтендә асыҡ сағылыш таба. Ошоға ярашлы урман һәм урман-дала райондары ҡәбиләләре дала



күскенселәренән аныҡ билдәле булған ултыраҡ тормош алып барыуҙары менән айырылып тора. Улар араһынан бигерәк тә Көнбайыш Урал буйының ананьин һәм ҡараабыҙ, Көнсығыш Урал аръяғының иткүл, горохов һәм сармат мәҙәниәттәрен айырым ҡарау фарыз.

### Ананьин мәҙәниәте ҡәбиләләре

Көнбайыш Урал буйының урман-дала райондарында дах-массагет ҡәбиләләре шартлы рәүештә ананьинсылар (Кама йылғаһы буйындағы Ананьин ауылы эргәһендә яҡшы өйрәнелгән тәүге ҡәберлектең атамаһына ярашлы) тип нарыҡланған ултыраҡ тормошло, малсылыҡ һәм игенселек менән шөғөлләнгән ҡәбиләләргә күрше йәшәгән. Б.э. тиклем VIII-II быуаттарҙа ананьин ҡәбиләләре Ағиҙел һәм Кама йылғалары, уларҙың барса ҡушылдыҡтары буйҙарында киң массив рәүешендә таралып йәшәй, һәм ошо йәһәттән Көнбайыш Урал буйындағы (Ағиҙел йылғаһы бассейнында) ананьинсылар төркөмдәре Кама йылғаһының бөтөн бассейнындағы күп һанлы, әммә сығыштары һәм мәҙәниәттәре буйынса ҡәрҙәш ҡәбиләләрҙең бер өлөшө генә булып тора. Күрәһең, Геродот Ҡара диңгеҙ скифтарынан төньяҡ-көнсығыштараҡ урынлашҡан алыҫ урман төбәгендә йәшәүсе фиссагеттар - күп һанлы һәм үҙенсәлекле ҡәбилә хаҡында яҙғанында ананьин ҡәбиләләрен күҙ уңында тотҡан. Геродот уларҙың һунарсылыҡ менән көн итеүе, ошо яҡтарҙа уларға күршеләш булған иирк исемле кешеләр йәшәүе хаҡында мәғлүмәт ҡалдырған.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ҠАРА ҺАУЫТЫ



**Һүрәттәге ҡара һауыты Башҡортостан Милли музейы филиалы - Аксаковтар ғаиләһе музейында һаҡлана. Уның иҫәп һаны: ЛХМСА ОФ 630.**

Түңәрәк формалағы, ныҡлы быяланан эшләнгән ҡара һауыты "Ҙур ҡунаҡ бүлмәһендә" ҡуйылған. Ҡара һауытының быялаһына таштар тултырылған. Ул оригиналь формалағы тотҡалы ҡара төҫтәге тимер аҫлыҡҡа ҡуйылған. Бындай ҡара һауытын бер урындан икенсеһенә күсереп йөрөтөү бик уңайлы булған. Әлеге ҡара һауыты XX быуат башында эшләнгән, 8,5 х 5,5 сантиметр ҙурлыҡта. Ул музейға Н.Н. Третьякова тарафынан бүләк ителгән.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

16-сы гв. атлы дивизияһы командирының 1943 йылдың декабрь айындағы бойороғона ярашлы яугирҙарыбыҙҙың ҙур бер төркөмө Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә. Бына уларҙың исем-шәрифтәре: 58-се атлы полктың элемтәсеһе, гв. рядовойы Вәлеев Ғәлиулла Ғәлимулла улы, граждандар һуғышында ҡатнашҡан (Миәкә районының Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан); 60-сы гв.атлы полкының 4-се ҡылыссылар эскадроны командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Саяхов Сафа Саҙрый улы, ул элегерәк ике мәртәбә "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән була (Миәкә районының Оло Кәркәле ауылынан); 62-се гв. атлы полкының 4-се эскадронының отделение командиры, гв. өлкән сержанты Атаев Аман (Төркмән ССР-ы, Ашхабад өлкәһенән); 20-се гв. ПВО дивизионының орудие командиры, гв. өлкән сержанты Ғәлимов Сәйет Мөхәмәт улы (Иглин районы, Яңы Ҡобау ауылынан); шул уҡ дивизиондың зенит орудиелары наводчиктары Ғарипов Ситдык Ғариф улы (Тәтешле районы, Шүлгән ауылынан); Ғаязов Ғилфан Ғаяз улы (Илеш районы, Ҡарабаш ауылынан); Дмитриев Валерий Максимович (Алматы ҡалаһынан); 62-се гв. атлы полкының 4-се эскадронының станковый пулеметтар взводы командиры, гв. кесе лейтенанты Исмәғилов Сәйет Халиулла улы (Күгәрсен районы, Юлдыбай ауылынан); 148-се гвардия артминполкының 4-се миномет батареяһында огневой взвод командиры Дәүләтов Сөләймән Латип улы (Баймаҡ районы, Сибай ауылынан); 16-сы гв. атлы дивизияһына беркетелгән 160-сы танк полкындағы Т-34 танкыһының башня командиры Андронов Вячеслав Борисович (Мәскәү өлкәһе, Звенигород ҡалаһынан); шул уҡ 160-сы танк полкының 4-се танк ротаһының механик-водителе Бегунов Валентин Иванович (Ярославль ҡалаһынан, яуҙа һәләк була).

Комдив бойороғо буйынса 104 яугирға Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, 16 кешегә - "Батырлыҡ өсөн" миҙалы, 7 һалдатҡа - "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалы тапшырыла. Бынан башҡа полк командирҙары ла байтаҡ ҡына яугирҙарын шул уҡ "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләй. Мәҫәлән, 60-сы гв. атлы полкы командирының 1943 йылдың 12 октябрендәге бойороғо менән ошо миҙалға лайыҡ булыусылар: 2-се эскадрондың отделение командиры, гв. өлкән сержанты Ғәлинуров Сабирйән Ғәлинур улы (Яңауыл районы, Һандуғас ауылынан); гв. рядовойы, 3-сө эскадрон ҡылыссыһы Ураҙғолов Мырҙағәли Ураҙғол улы (Хәйбулла районы, Аҡъяр совхозынан); 2-се эскадрондың отделение командиры, гв. сержанты Ғиззәтуллин Ғабдулла Ғөбәйҙулла улы (Шишмә районы, Өйҙөрәк ауылынан); гв. рядовойҙары, ҡылыссылар Калькин Андрей һәм Калькин Егор Степановичтар (Стәрлебаш районы, Денисовка ауылынан); 20-се гв. ПВО дивизионының 2-се эскадронының пулемет расчеты командиры, гв. өлкән сержанты Байтурин Миңлеәхмәт Байдәүләт улы (Миәкә районы, Сәфәр ауылынан), 2-се эскадрон пулеметчигы, рядовой Вәлеев Вәли Хажиғәли улы (Стәрлебаш районы, Ҡарағош ауылынан) һәм башҡалар.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# ЙӨРӨГӘН АЯҠҠА - йүрмә булмаһа -

**Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы таныуынса, кеше ҡабул иткән аҙыҡтың 40 проценты ярмаларҙан торорға тейеш икән. Сөнки улар көс-ҡеүәт биреүсе ҡатмарлы углеводтарҙан тора һәм һаулыҡҡа, хәл-торошобоҙға бик ыңғай тәьҫир итә.**

Ә бит беҙҙең халыҡ борон-борондан сәсеп үҫтергән һәм ҡулланған ярма-игенде. Атабабаларыбыҙҙың бороңғо замандарҙа уҡ иген үҫтереү менән шөғөлләнгәнен "сәсеү" һүҙенең мәғәнәһенән дә күрәбеҙ. Көньяҡ Уралда көн күргән боронғо арийҙарҙың санскрит һүҙлегендә **"sasya"**, йәғни башҡортса **"сәсеү"** һүҙе бар. Уларҙан әҙерләнгән **бутҡа** һәм **өйрә, ыумас ашы** кеүек ризыҡтар атамалары ла бар телебеҙҙә. Халыҡ ижадына мөрәжәғәт итһәк, был турала мәғлүмәт ярайһы ғына күп теркәлгән:

*Бутҡа бешерһәң,*
*майың етерлек булһын.*
*Бутҡа майҙан туймай.*
*Кеше өйрәһе үҙеңдең*
*бутҡаңдан тәмлерәк күренә.*
*Бутҡаң майлы булһа,*
*эшең яйлы булыр.*
*Көн дә майлы бутҡа булмай.*
*Өйөңдә өйрә эҫә алмаған,*
*кешегә барып бутҡа ашаған.*
*Һарандың бутҡаһы*
*шыйыҡ булыр.*
*Һүҙҙән бутҡа бешмәҫ.*
*Эш майлы бутҡа түгел.*
*Эш яйы менән,*
*бутҡа майы менән.*
*Бергә бешергән*
*өйрә ҡуйы булыр.*
*Өйрәне өйҙә һыуыт.*
*Өйө бейектең өйрәһе шыйыҡ.*
*Итле өйҙә ике кис,*
*өйрәлелә бер кис.*
*Өйрәлелә бер кис,*
*бутҡалыла ике кис.*

Эйе, "Ас хәлен туҡ белмәй", тигән заманда йәшәп, ризыҡ ҡәҙерен белмәгән быуындар үҫте хәҙер. Шуға күрә үҙебеҙҙең ерлектә үҫкән, беҙгә тәғәйен аҙыҡтар тураһында һөйләшеүҙе дауам итеп, онотолғанын иҫкә төшөрөп, уларҙың әһәмиәтенә иғтибарыбыҙҙы йүнәлтеп, ярмалар төрө, уларҙың файҙаһы тураһында һөйләшеп алыуҙы кәрәк тип таптыҡ.

*Ямғыр, яу, яу, яу,*
*Иген үҫһен тау-тау*
*Арыштан, бойҙайҙан-*
*Беҙ һорайбыҙ Хоҙайҙан!*

Был теләктән күреүебеҙсә, иң тәүҙә иҫкә алыу кәрәкле бөртөклө ашлыҡ ошо икәүҙер.

***Арыш (рожь)*** - оҙонса нәҙек орлоҡло, ҡыяҡ япраҡлы ашлыҡ, шул үҫемлектең орлоғо. Дәрәҫ туҡланыу ниәтенән ҡараһаҡ, арыш үҙенең үҙенсәлектәре менән күберәк файҙалы. Арыш ярмаһы һәм оно бойҙайға ҡарағанда һаулыҡ өсөн әһәмиәтлерәк, тип таный белгестәр. Бойҙайҙан айырмалы рәүештә, унда бөртөк ашлыҡтағы аҡһым матдә-елемсә (клейковина) әҙерәк. Бөтә Рәсәй Орлоҡ һәм уны аҙыҡҡа эшкәртеү буйынса фәнни-тикшеренеү институты (ВНИИЗ) раҫлауынса, арыш орлоғон ҡулланыу, уның составында аминокислоталар һәм аҙыҡ сүстәре күп булыу сәбәпле, иммунитетты күтәреү һәм ҡан ауырыуҙарына дусар булыуҙан һаҡланыуҙа иң беренсе урында тора.

Е, А и РР витаминдарына, фосфор, кальций, магний һәм тимергә бай арыш ярмаһы һәм оно бик файҙалы ашамлыҡ. Халыҡ та быуаттар буйына уға тейешле баһа бирә килгән: Арыш икмәге ашаһаң, быуының нығ булыр. Арыш икмәген майлап аша (әйтем). Арыш сәсһән, икмәк ашарһың. Арыштың хисабы һуҡҡас беленер. Атың барҙа арыш сәс.

***Бойҙай (пшеница)*** - орлоғонан аҡ икмәк һәм башҡа ҡамыр аштары бешереү өсөн әҙерләй торған башаҡлы үҫемлек һәм шул үҫемлектең орлоғо. Халыҡ ижадында ул түбәндәге мәҡәлдәрҙә бик мәғәнәле ҡулланылған: Бойҙай сәсһәң, башағын йый, шалҡан сәсһәң, тамырын йый. *Бойҙай яҡшыһы ерҙән, ҡатын яҡшыһы ирҙән. Бары ла яҡшы - беҙ яман, бары ла бойҙай - беҙ һалам. Ирҙәр - имән тамыры, ҡатындар - бойҙай ҡамыры. Бойҙай ҡылсыҡһыҙ булмаҫ.*

Химия юлы менән ағартылған бойҙай онона төрлө тәмләткестәр ҙә ҡушып ебәреп, төрләндереп бешерелгән ҡамыр ризыҡтарына һалышты халыҡ. Ә бит аҡ икмәк, аҡ ҡалас ҡасандыр тик байрам ашы тип кенә һаналған. Уларҙы көндәлек ҡулланыу аҙыҡ эшкәртеү юлын тоткарлап, яй үҙләштерелеп, кәүҙә ауырлығын арттырыуҙа ҙур роль уйнай! Бойҙай ононан күпертеп бешергән аҡ икмәккә ҡаршы, арыш ононоң үҙоҫеткеһендә бешергән икмәктең файҙаһы тураһында мәғлүмәт һәм рецепт менән уртаҡлашып, күптән Башҡорт Википедияһында мәҡәлә яҙып ҡуйғайным. Беҙҙең халыҡ шул идеяны эләктереп ала һалмай, магазиндан алған агрессив әсетке (дрожжи) менән мауығыуын дауам итә, үкенескә күрә.

***Арпа(ячмень)*** - орлоғо ярма, һыра һәм фураж әҙерләү өсөн файҙаланыла торған оҙон ҡылсыҡлы ашлыҡ. Тибет белгестәре был аҙыҡтың тәнебеҙҙәге "ел-haya" элементын һәм үт һыуын баҫыуҙа, тынысландырыуҙа,быуындарҙа йыйылған ағыулы матдәләрҙән арындырыуҙағы әһәмиәтен билдәләй. *Арпа-бойҙай аш булды, алтын-көмөш таш булды. Арпа алтмыш көндә өлгөрә. Арпа сәскән бойҙай урмаҫ. Бәхетһеҙ кеше бойҙай сәсһә, арпа үҫер.* Ошондай мәҡәлдәрҙән күреүебеҙсә, халыҡ уны бойҙайҙан кәмерәк күргән һымаҡ. Әммә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, арпа ярмаһы А, Е, В, РР витаминдары, үҫемлектең ҡабығын барлыҡҡа килтерә торған матдә (клетчатка), тимер, йод, калий һәм фосфорға бай булараҡ, бик файҙалы ризыҡ. Арпа бәүел ҡыуыу, тәнде төрлө токсиндарҙан таҙартыу һәләтенә лә эйә икән. Дағстандың баш ҡалаһы Махачкалала "Детоксүҙәктә" дауаланыу үткәндә көн дә тәлбинә тигән шыйыҡ бутҡа рәүешендәге эсемлек бирелә ине. Ашханала эшләүсе ҡатындарҙан шул ризыҡты арпа онон һөттә бешереүҙәрен төпсөнөп белеп ҡайттым һәм уны йыш ҡына үҙем дә әҙерләп алам.

***Борсаҡ (горох)*** - ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ҡараған, баҡсала, йәки баҫыуҙа үҫтерелә торған түңәрәк орлоҡло бер йыллыҡ үҫемлек. Һүҙ берегеп, килешеп эшләү осрағын халыҡ - *борсағы бешеү;* маҡтаныу, шапырыныу, кәрәгенән артыҡ шаштырып һөйләүҙе *борсаҡ һиптереү, шыттырыу* тип кинәйәләнә, мәҡәлдәрҙә лә ул иҫкә алына: *Асҡыс йоҙағы менән, борсаҡ ҡуҙағы менән. Хаҡ ярым хаҡ, бот ярым борсаҡ.*

Мин үҙем борсаҡты баҡсала үҫтереп, ҡышҡылыҡҡа йәшел ҡуҙаҡлы килеш туңдырғыста һаҡлайым. Әммә магазиндан алған борсаҡ ярмаһын да ҡулланам. Бешеүе оҙаҡ булғаны өсөн тәүҙә ярманы бер нисә сәғәт һыуҙа тотоп торам. Ҡыҙҙырылған кишер, һуған, ашҡабаҡ, картуф, киптерелгән йә туңдырылған йәшел үлән тәмләткестәре ҡушып бешергәндән һуң блендерҙа иҙеп әҙерләгән өйрәне ваҡ шаҡмаҡтар рәүешендә киптергән шөкәрә менән ашарға бик яратабыҙ.

***Ҡарабойҙай (гречиха)*** - аҡ, баллы сәскәле, өс ҡырланып торған көрән орлоҡло иген үҫемлеге. Шул үҫемлектең аҙыҡҡа ҡулланылған орлоғо. Ҡарабойҙай ярмаһында протеин, кальций, цинк, А, В, Е һәм РР төркөмөнә ҡараған витаминдар етерлек. Составында 12 процент аҡһымға 3 процент ҡына май тура килеүен һәм 100 грамм ярманың 313 ккал биреүен иҫәпкә алып, бөтәүләй һәм ваҡланған ярманы диетологтар күптәргә тәҡдим итә. Ошо сифаты менән ҡарабойҙай ярмаһы эсәктәрҙең эшмәкәрлеген көйләй, холестеринды кәметеп, шәкәр диабеты һәм гипертония сирҙәрен иҫкәртә. Был ярма иң оҙайлы һаҡлау ваҡытына ла эйә икән, хатта дымлы урында ла күгәреүгә бирешеп бармай.

***Тары (просо)*** - ваҡ ҡына йоморо орлоҡло, киң ҡыяҡ япраҡлы, ялбыр башаҡлы ашлыҡ. Шул ашлыҡтың орлоғонан ярма эшләнә (пшено). *Дары, тарҡалыу* һүҙҙәре уға тамырҙаш. Тарыға бәйле мәҡәлдәрҙең күплеге был ашлыҡтың беҙҙең халыҡта борондан ҡулланылғанына дәлил: *Донъя киң тип, таралма: таралған тарыны тауыҡ супләй. Табылмаған мал тары бөртөгөнән дә күп. Тамаҡ, бахыр, тары төйҙөрөр. Барыҫ йылы барын сәс, һис булмаһа, тары сәс. Бер тарынан бутҡа булмаҫ, бутҡа булһа ла йортҡа булмаҫ. Танһыҡҡа - тары бутҡаһы. Тары бутҡаһы танһыҡҡа ла килеште, таҡыя ташлап кереште. Тауыҡ төшөнә тары инер. Торна күҙе тарыла. Торнанан ҡурҡҡан тары икмәҫ. Тәңре көнө тарынан да күп. Тупраҡ игеп, тары урмаҫһын. Тауҙай тырышлыҡ биргәнгә, тарылай бәхет бир.*

Тары бутҡаһы, тары ҡоймаһы кемгә генә таныш түгел! Тултырма эшләгәндә лә ит араһына тары ярмаһы ҡушып ебәреләр. Тибет медицинаһы тарыны кәүҙәне тығыҙландырыуға, ауырайтыуға булышлыҡ итеүсе аҙыҡ тип таный, тары ризыҡтарын һыңған, сатнаған һөйәктәрҙе бөтәштереү маҡсатында ҡулланырға тәҡдим итә.

***Һоло (овес)*** - ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған, ялбыр башлы, көплө орлоҡло һабан ашлығы, шул ашлыҡтың орлоғо. *Ат тартмай, һоло тарта. Атты сыбыртҡы менән ҡыума, һоло менән ҡыу. Һоло ашамаҫ арғымаҡ япраҡҡа моң булған.* Түлһеҙ ҡатындарҙы имләүҙә ҡулланылған. Балаһы булмаған ҡатын итәгенә һоло һалып, яңы ҡолонлаған бейәне ашатырға тейеш.

Һыны, рәүеше килешһеҙ, оҫталығы, таһыллығы булмағанды һолһоҙ тип атауҙары ла ошо һүҙгә бәйле булып сыға түгелме?

Бөтәүләй һоло ярмаһын тирмәндә тарттырып, шул ондан ҡойған буҙа кемдәргә генә көс-ҡеүәт өҫтәмәгән?

А, В, Е витаминдарына, калий, магний, цинк һәм бета-глюканға ифрат бай һоло бутҡаһының ҡанды артыҡ холестериндан таҙартыуын, ҡандағы шәкәр кимәлен көйләп, аҙыҡ эшкәртеү процесын тиҙләтеүен иҫбатлай был өлкәләге тикшеренеүҙәр. Беҙ магазиндан һатып алған "овсянка" (геркулес) ярмаһының файҙалылығы кәмерәк, сөнки ул көбөһөнән таҙартылған. Шулай ҙа ярманың был төрө шәкәр һәм төрлө тәмләткестәр ҡушып тиҙ бешә торған итеп сығарылған әҙер бутҡаларҙан өҫтөрәнөрәк. Һуңғыһын ҡулланыуҙың зыяны, файҙаһына ҡарағанда күберәк, тиҙәр белгестәр.

***Дөгө (рис)*** - ҡыяҡлылар ғаиләһенә ҡараған башаҡлы, аҡ оҙонсараҡ орлоҡло, йылы яҡтарҙа һуғарып үҫтерә торған үҫемлек. Шул үҫемлектең ашлыҡ өсөн алынған оҙонсараҡ аҡ орлоғо. Был ярма беҙҙә үҫтерелмәһә лә, күптән ҡулланыла торған ризыҡ. Дөгөнән әҙерләнә торған милли ашһыу төрҙәре киң таралғаны һәр кемгә мәғлүм. Ә дөгөнөң тибет медицинаһында эс китеү һәм ҡоҫҡо килеүҙе туҡтатыу, енси яҡтан көсһеҙлектә



# ЙҮРМӘ,

## ярма

дауалағандарын, бәлки, кемдәрҙер белеп бөтмәйҙер. Шулай уҡ дөгөнө йылы миҙгелдә ҡулланыу яҡшыраҡ, сөнки уның организмды һалҡынайтыу, ҡыҙыуҙы һүндереү, тынысландырыу кеүек үҙенсәлектәре йылы яҡта һыуҙа үҫеүенә бәйле.

Ярма өсөн ҡулланылғандарынан тыш, ҡыҙҙырып ашала торған орлоҡтар ҙа бар. Шуларҙың береһе ***тарма (конопля).*** Һабағынан сүс, орлоғонан май һығып алына торған тарбаҡай ботаҡлы бейек үлән; киндер. Уның файҙаһын ата-бабалар төрлө яҡлап күргән: *киндер сәсһәң, күлдәк кейерһең. Ҡара икмәккә туйған ас булмай, киндер күлдәккә туйған яланғас булмай.* Беҙҙең халыҡта был үҫемлектең орлоғо менән туйыныу миҫалдары ла етерлек. Бына шуларҙың береһе менән "Таң" гәзитендә (15/11/2019) Ләлә Заманова уртаҡлашҡайны:

"...Әсәйем эшләп йөрөнө, ул-былды йүнләүгә шәп ине. Өйҙәге эштәр өләсәй елкәһендә. Ул киндер ҙә һуҡты. Тарма беҙҙең баҡсала күп үҫте. Орлоғо бешкәс, башта тарманың орлоғон һуғып алып, ҡыҙҙырып, килелә төйә һәм йомарлап алып, сәй эскәндә беҙгә балғалаҡ башындай ғына итеп тәмләргә бирә ине. Уның тәмлелеге! Майлы ғына була торғайны..."

Беҙ ҙә ашаныҡ ул киндер орлоғон бала саҡта. Август-сентябрь айҙарында орлоҡ өлгөрөп, ҡойолоп, турғайҙар сүпләп өлгөргәнсе, мин уны әле лә әҙерләп алам. Арыш ононан икмәк бешергәндә ҡушып ебәрһәм, ашағанда сырт-сырт итеп ҡалыуы бөтәһенә лә оҡшай.

***Көнбағыш (подсолнечник)*** - оҙон һабаҡлы, эре һары сәскәле, таҡыя башлы (емештәре ҙур тәрилкә һымаҡ түңәрәккә урынлашҡан), орлоғонан май алына торған ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ингән бер йыллыҡ үҫемлек. Шул үҫемлектең ҡабыҡлы орлоғо, емеше. Перула, Инка мәҙәниәтендә, Мексикала ацтектарҙа Ҡояш Тәңреһе символы булып тора. Рәсәйгә Голландиянан Петр батша алып ҡайта. *Көнбағыш һабағы менән һатылмай,* тигән мәҡәл-әйтемде кем нисек аңлайҙыр? Көнбағыш орлоғон ҡулланыу ҙа халыҡ араһында ярайһы уҡ киң таралғанға күрә, ҡулланыуға айырым реклама ла кәрәкмәй.

Ошо урында үҙемдең ҡунаҡ йыйғанда ғына яратып әҙерләп һыйлай торған бер ашамлыҡтың рецебы менән бүлешәйем әле. Мин уны Грецияла эшләгән сағымда өйрәнеп ҡайтҡайным. Игендең һәм башаҡлы, ҡыяҡлы үләндәрҙең орлоғо һәм ҡаты ҡабыҡлы төрлө орлоҡтоң эске өлөшөнән (семечко; ядро, ядрышко) әҙерләнә ул. Бөтәһен бергә атаһаҡ, ем һәм емештәрҙән тора инде. *Алдан 1-2 тәүлек йылыла берәй стакан яҡшы сортлы, таҙа бойҙай еме шыттырып алам. Яртышар стакан грек сәтләүеге, миндаль, көнбағыш орлоғон ҡыҙҙырып, әҙерләп ҡуям. Бер гранаттың емештәрен таҙартып, шунынса йөҙөмдө ҡайнар һыуҙа йыуып бешекләп алғас, барыһын бергә бутайым. Ике-өс печеньены ҡырғыстан ҡырып, йә шөкәрә онтағы ла өҫтәп ебәрелһә, бик үҙенсәлекле тәм менән туҡлыҡлы, көс-ҡеүәт биреүсе ашамлыҡ килеп сыға. Сәй менән ашарға башҡа бер ниндәй ризыҡ та кәрәк булмай. Тиҙ кибеп, оҙаҡ һаҡлап булмау сәбәпле, ҡунаҡ һыйлағанда ғына отошло уны әҙерләү. Яҙғы өҙлөккән мәлдә, ураҙа ваҡытында бик килешә был ашамлыҡ.*

***Кукуруз*** ярмаһы тураһында ла белгәндәребеҙҙе иҫкә төшөрәйек. Беҙҙең ата-бабалар уны үҫтермәгән, беҙҙең ерлеккә хас түгел был үҫемлек. Кулинарияла йышыраҡ консерваланған килеш, йә булмаһа, уны сәкәне менән бешереп ашау ҡулланыла. Әммә кукуруз бутҡаһы ла иғтибарға лайыҡлы ризыҡ. Ашҡаҙан-эсәктең микрофлораһын көйләү, таҙартыуҙа, B ,E, A, H витаминдары, триптофан, лизин, тимер, кальций, магний, фосфор менән байытыуҙа, ашҡаҙан, үт ҡыуығы, бауыр ауырыуҙарын булдырмауҙа уның әһәмиәтен баһалай тикшеренеүселәр. Иң юғары температурала әҙерләү ҙә кукуруз ярмаһының файҙаһын юҡҡа сығара алмай икән!

**Шулай итеп,** Грецияла йәшәгән бер йылымда уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙебеҙҙеке менән сағыштырып, күп уртаҡлыҡтар барлығын арыу ғына өйрәнгәйнем. Иҫемдә, мин йәшәгән ғаиләнең хужабикәһе Сулла ханым, аш төрләндереп әҙерләүҙән ялҡып китәмелер, ҡайһы саҡта чечевицанан өйрә генә бешереп ҡуя ине. Хужа кеше Янис әфәнде был хәлгә һис күнмәй, хатта кәйефе төшөп китә торғайны. Шул сәбәпле ирле-ҡатынлы был ишәй менән ҡушайҙың араһында була торған әрепләшеп китеүҙәренә йыш ҡына шаһит була инем. Теге ағай ашауҙан ҡәнәғәтлек кисерһә, ҡатынынан: "Аврио ти ҫафаме? (Иртәгә ни ашайбыҙ, ни бешерәһең?)" - тип һорай. Көйһөҙөрәк сағы булһа, әбейе: "Факи!"(Беҙҙеңсә, өйрә) - тип кенә ҡуя тегегә. Шул саҡта Янис әфәнденең күҙенән хатта йәштәре килеп сыҡҡанына иғтибар итеп, был хәл бер нисә тапҡыр ҡабатланғас, бының сәбәбен үҙенән ипләп кенә һораным. Һөйләшеүгә ихлас кеше булараҡ, ағай миңә был хәлдең серен асты. 1945 йылғы был икәүҙең бала сағына Икенсе донъя һуғышынан һуңғы йәшәү кимәленең насар осоро тура килгән. Шул заманда әсәһе иртәле-кисле чечевица өйрәһе (факи) бешергәнгә күрә, ул ризыҡтан ғарҡ булып бөгөү хәтерендә ҡалған икән уның!

Быйндай күренешкә ҡарата ҡәнәғәтһеҙлек белдереү *"Иртән дә өйрә, кис тә өйрә, был ҡорһаҡтар ни күрә", "Күп ашаһаң борсаҡты - тишеп сығыр ҡорһаҡты"* тигән мәҡәл-әйтемдәр аша беҙҙә лә һаҡланған икән дә баһа! Ошоға оҡшаш хәлгә үҙебеҙҙең ғаиләлә лә тарығаным булды. Әсәйем мәрхүмә, "Танһыҡҡа тары бутҡаһы", тип, шул аҙыҡты әҙерләр булһа, атай мәрхүм дә: "Ҡуйсәле, әсәһе, фәҡирселек теләп, бешермә шул тарыңды!" - тиер ине.

Тимәк, бер үк төрлө аҙыҡты йыш ҡулланыу туйҙыра ғына түгел, бүктерә, хатта уны ҡабул итмәҫлек кире тойғоға ла килтерә икән шул. Шуға күрә һәр нәмәлә сама белеп, алтын урталыҡты тотоу фарыз аш төрләндергәндә.

**Ҡур тураһында.** Эйе, был мәҡәләбеҙҙә гәзит уҡыусылырыбыҙҙы тағы бер тапҡыр үҙ еребеҙҙә үҫеп, ҡеүәт йыйған бөртөклө ашлыҡтарҙан яһалған ярма аҙыҡтарының ашамлыҡ әҙерләүҙә төп урынды биләргә тейеш икәнен асыҡларға тырыштыҡ. Ергә ерегеп көн күргән алдағы быуындар халҡыбыҙҙың меңәр йыллыҡ йәшәү тәжрибәһен мәҡәл-әйтемдәргә төйнәп ҡалдырған. Уларҙың күпкенәһендә дөрөҫ туҡланыуға бәйле талаптар һаҡланған. Орлоҡтарҙа **дөйөм бер башланғыс көс, ҡеүәт** барлығын белгән боронғолар. Хә-ҙерге фәнгә орлоҡтоң химик составы билдәле, шуға нигеҙләнеп, ғалимдар яһалма орлоҡ уйлап тапһалар ҙа, ул орлоҡтан бер ниндәй ҙә үҫемлек үҫеп сыға алмаясаҡ. Сөнки уның үҙәгенә Абсолют Аң, Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәбиғи орлоҡта йәшәү барлыҡҡа килтерер көс, Бөйөк Башланғыс **ҡур** һалынмаған! Ошо көс, кәрәкле кимәлдә йылылыҡ, еүешлек кеүек уңайлы шарттар тыуҙырылғанда, мәле еткәс, яңы үҫемлеккә башланғыс бирәсәк. Айырым бер шарттар үтәлгәс, шул уҡ үҫемлек етешеп, үҙенән яңы орлоҡтар яралтасаҡ! Бына шул йәшәүгә һәләтлелек ҡеүәте һалынғанға күрә, үҙ ерлегебеҙҙә үҫкән иген культураларынан әҙерләнгән бутҡаларҙан йөҙ сөйөрмәйек, милләттәштәр! Ураҙа айында ит ризыҡтарынан бер аҙ арынып, күберәк һәм йышыраҡ бутҡалар менән туҡланып, сәләмәтлегебеҙҙе көйләргә ниәтләйек!

*Ере барҙың еме бар, еме барҙың име бар. Маңлайҙан аҡҡан әсе тир ергә тамһа, ем булыр,* тигән аҡыл төйөндәренән сығып, үҙ еребеҙҙә, үҙебеҙ үҫтергән үҫемлек аҙыҡтарынан көс-ҡеүәт алып йәшәргә өйрәнәйек!

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА.**

*УЙЛЫҒА -УЙ*

# НИ ӨСӨН БЕҘ...

## ғибәҙәт ҡылабыҙ?



**Элегерәк намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу хаҡында һүҙ сыҡҡас, бер ағай: "Ә нишләп ҡайһы бер кеше ғүмер буйы намаҙ уҡыһа ла, алтмыш-етмешкә лә етмәйенсә үлә? Бер мәртәбә лә намаҙ уҡымаған, ураҙа тотмаған бәғзеләр хатта туҡһандан ашыу йәшәй бит!.." - тигән һымағыраҡ һүҙҙәрҙе бик еңел генә итеп әйтеп һалғайны.**

Эйе, яҡташтарыбыҙҙың күпселеге: "Аллаһтың барлығына эстән генә ышанып йөрөйөм, миңә ана шул еткән",- тигән инаныуҙа шул. Йылына бер мәртәбә туғандарҙы йыйып, мулла саҡыртып, мәрхүмдәргә аят уҡытып, ҡунаҡтарға тинлектәр өләшеп, хатта ҡайһы берҙә ҡорбан салдырһа, уға шунан артығы кәрәкмәй, тигән фекерҙә улар. "Намаҙ уҡырға мин мулла түгел бит, ә ураҙа тотоуҙы организмды ғазаплау тип һанайым",- тиеүселәр ҙә юҡ түгел. Барлыҡ ғаләмдәрҙе, тереклекте бар ҡылған Аллаһы Тәғәләнең изге Ҡөрьәндәге "Мин ендәрҙе һәм кешеләрҙе фәҡәт Үҙемә ғибәҙәт ҡылыу өсөн генә яралттым" тигән мәғәнәле аятын килтереп: "Раббыбыҙ үҙенең изге Китабында беҙгә шулай ҡушҡан бит", - тип әйтеү ундайҙарға бөтөнләй тәьҫир итмәй. Хатта: "Ысынмы? Ҡайһы сүрәнең ниндәй аятында шулай әйтелә?"- тигән һымаҡ һорау биреүсе лә табылмай...

Башта әйтелгәнгә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ә шулай ҙа ни өсөн беҙ Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылып йәшәргә тейешбеҙ? Был донъяла бай йәшәр өсөнмө, ә бәлки, әлеге әйтмешләй, оҙаҡ ғүмер итеү маҡсаты менәндер? Был һорауға яуапты шунан башлайыҡ. Эш уға ҡалһа, Раббыбыҙҙың иң һөйөклө ҡолдары - күп кенә бәйғәмбәрҙәребеҙ ҙә оҙаҡ йәшәмәгән бит. Үҙ ғүмерен фәҡәт кешеләргә иман таратыуға, бер Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыуға өндәүгә бағышлаған расүлуллаһ - Мөхәммәт с.ғ.с. тик алтмыш өс йәшкә тиклем генә йәшәгән, Ғайса ғәләйһис-сәләм дә был донъяла ни бары утыҙ өс йыл ғына ғүмер иткән! Башҡа ҡайһы бер бәйғәмбәрҙәрҙең дә (Аллаһ улар менән риза булһын) үҙ халыҡтары тарафынан ыҙа сиктерелгәне, хатта үлтерелгән осраҡтары билдәле бит. Шулай уҡ Аллаһ илселәре сереп байып та китмәгән, хатта аслы-туҡлы йәшәгәндәре лә күп булған...

Бына шулай: ғибәҙәт ҡылып йәшәүҙең төп маҡсаты - был донъя мәнфәғәттәре, ихтыяжынды, теләктәреңде ҡандырыу өсөн генә түгел икән шул. Шәриғәт тарафынан оҙаҡ, бай йәшәү тыйылмаған, әлбиттә. Раббыбыҙ беҙгә күпме ғүмер биргән, шунса йәшәйбеҙ инде. Тик ғүмеребеҙҙең маҡсаты үҙебеҙҙе Ахирәткә - мәңгелек тормошҡа хәстәрләүҙән дә ғибәрәт, тип инаныу кәрәк. Бәйғәмбәрҙәр аша беҙгә ебәрелгән талаптарҙы үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәү, Ҡиәмәт көнөндә Аллаһы Тәғәлә алдында еңел хисап биреп, Йәһәннәм утынан ҡотолоп, Йәннәткә инеү бәхетенә ирешеү - беҙҙең төп маҡсатыбыҙ булырға тейешлеген дә аңларға тырышайыҡ, ҡәҙерле туғандар!

Әйткәндәй, Аллаһ илсеһе Мөхәммәт с.ғ.с. бер хәҙисендә: "Ҡиәмәт көнөндә Аллаһ ҡолонан иң беренсе эш итеп намаҙ тураһында һораясаҡтар. Әгәр ҙә ул еренә еткереп уҡылған булһа, уның башҡа ғәмәлдәре лә дөрөҫ үтәлгән һанала. Әгәр ҙә инде уның намаҙы яраҡһыҙ булһа, башҡа ғәмәлдәре лә яраҡһыҙ була", - тип әйткән. Фәҡәт был донъяла йәшәйешебеҙҙе генә ҡайғыртабыҙ һәм Ахирәт тормошона ышанмайбыҙ икән, Раббыбыҙ биргән ғүмеребеҙҙе заяға үткәреп, үҙебеҙгә үҙебеҙ золом (ғәҙелһеҙлек) ҡылабыҙ, тигән һүҙ. Изге Китапта тик был донъя тип кенә йәшәгәндәр тураһында: "Улар донъя тормошон Ахирәт бәрәбәренә һатып алдылар, уларға яза еңеләйтелмәҫ һәм ярҙам да ителмәҫ", - тип әйтелә (Әл-Бәҡара сүрәһе, 86-сы аят). Беҙ, мосолмандар, Аллаһы Тәғәләнән ике донъя өсөн дә шулай һорап ялбарабыҙ: "Раббәнәә әәтинәә фии-ддүнйәә хәсәнәтәү үә фил-әәхирати хәсәнәтәү үә ҡинәә ғәҙәәбә-ннәәр" (Раббыбыҙ, беҙгә был донъяла изгелек бир, Ахирәттә лә изгелек бир һәм беҙҙе ут ғазабынан һаҡла!) ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 201-се аят).

Үҙе дин юлында булған күренекле шағирыбыҙ Мәүлит Ямалетдин ағай (мәрхүм) бер шиғырында ошолай тип яҙғайны:

Ғүмер - бүләк. Ә бит уның эйәһе бар.
Быны һүҙһеҙ аңлар кемдең мейеһе бар:
Шундай гүзәл, ҡабатланмаҫ бүләк өсөн
Шөкөр итеп, Уға башты эйәһе бар.

Ҡылған ғибәҙәттәребеҙ - намаҙ, ураҙаларыбыҙ менән риза булып, Аллаһы Тәғәлә һәммәләребеҙгә ныҡлы иман, тәҡүәлек, донъяла һәм Ахирәттә бәхет насип итһен. Амин.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа һуҙылған рәхәтлек был, ары ни булырын, күҙ менән ҡаш араһында ялтлап алған алдатҡыс йәшен ватҡыһының бер аҙҙан ҡара, суйындай ауыр болоттар менән ҡапланырын да яҡшы белә.***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТАБЫЛДЫҠ

хикәйә

Көйөк, кисә табындаштары ҡалдырған тын алғыһыҙ еҫтән күңеле болғанды. Ауырлыҡ менән карауатынан ҡалҡынып, өҫтәл ситендәге һарыға ҡатҡан ҡырлы стаканға шешәләр төбөн һарҡытырға маташты. Бер ни ҙә килеп сыҡманы, сөнки әшнәләре әлеге мәлдә әжәл дарыуына бәрәбәр араҡының тамсыһын да ҡалдырмағайны. "Асмәйел сиңерткә сиреүе! Миңә тимәһә, хәҙер үк ятып дөмөк, ҡайғыртыусы табылмаҫ!" Теле осона килгән әсе һүгенеүен көскә тыйып ҡалып, күңеленән шулай һөйләнде генә. Тәнтерәкләп ванна бүлмәһенә инеп, башын һалҡын һыу менән сылатты, таушалған, шырт баҫҡан биттәрен, иттәре кәмеп, һалынҡы тирегә ҡалып, ашалған балта һабылай сысайған мөсһөҙ муйынын еүешләп алды. Ҡайһылыр кимәлдә еңел булып ҡалғандай итте. Кире залға үтеп, иҙәндән төртәләнеп йөрөп эҙләнеп, бер-ике һурмалы төпсөк табып, балконға сыҡты. Тәмәке төтөнө йәнә күңелен болғатты, шуға ҡулындағын һүндереп тә мәшәҡәтләнмәй түбәнгә атты: "Инәнде!.." Асыу менән һүгенде был юлы, инеп, керҙән шыбаҡшыған сәстәрен ҡушуслап, тубыҡтарына терһәкләнеп кире карауаты ҡырына ултырҙы. Ятманы. Һенағастай һерәйҙе генә. Шул мәл һаҡ ҡына итеп ишек шаҡынылар. "Кем йөрөй икән был мәлдә, таң менән? Берәйһе бер йотмалыны тотоп күренһә, ҡайһылай ҙа шәп булыр ине... Хәйер, көт уларҙан, һәммәһе лә ошо мәлдә дихлофостан алйыған себендәрҙәй ҡайҙа етте шунда тырпырап яталыр әле..."

- Килгәсең ин, нимә анда боҫҡанһың?

Ҡыҫылған ишеккә Дауыт тумалаҡ, түбәһе пеләшләнә төшкән йомро башын тыҡты:

- Инергә мөмкиндер, абзый, ә?

- Ә-ә-ә, Дауыт Хәйруллыч, - мыҫҡыллағандай һуңғы һүҙгә баҫым яһаны, - был һинме ни әле, килгәсең үт! - Тарһынманы, ҡатырғанманы, эргәһенән урын тәҡдим иткәндәй шылыңҡырап та ултырҙы хатта.

- Хәлдәрең нисек, Мозафар?..

- Үҙеңсә тылҡы әләйһә, Ғәлиевич!

- Эйе, Мозафар Ғәлиевич! Нисек йәшәп ятаһығыҙ, тим, как жизнь молодая?

- Күреп тораһың да!

- Вообще-то, да. Бына һеҙҙең йорт янынан уҙып барҙым да, туҡтәле, абзыйҙың хәлен белеп сығайым, тип бороморға иттем, так сказать, нежданно-негаданно.

- Ҡапыл ғына иҫеңә төшөп киттемме ни, ышанғы килмәй.

- Нимә уйланым, шуны әйттем. Алдаша, ялғанлай белмәйем мин.

- Шулай уҡмы? Хәҙер алдашмаған, урлашмаған берәйһе ҡалғанмы икән был донъяла? Не верю!

- О-о-о, һеҙ билдәле режиссер Станиславскийҙан былайыраҡ юғарынан бәрҙегеҙ! - Дауыт иләмһеҙ хихылданы.

- Ундай кешене белмәйем, ишеткәнем дә юҡ.

- Нисек инде белмәйһегеҙ, театр донъяһының бик билдәле генийы бит ул Константин Станиславский. Чеховтың "Вишневый сад", "Три сестры", "Дядя Ваня"һын сәхнәгә ҡуйған кеше!

- Башты ҡатырма юҡ-бар хәбәрең менән, хәл белергә индем, тиһең бит, әйт йомошоңдо!

- Абзый, шуны һорамаҡсымын, теге саҡ һүҙ араһында, ҡатынымдың ҡәберенә ҡиммәтленән таш ҡуйҙыртам, тип әйтеп ысҡындырған инең. Эшләттеңме шуны?

- Аҡса еткереп булмай. Хотя, йыйыштырып ҡарарға, тупларға уй бар.

- Йыйырһығыҙ микән? - Дауыт кинәйәләгәндәй өҫтәлдәге араҡы шешәләренә күҙ атты.

- Ништәп йыймай тигән, ҡулымдан килә минең!

- Һис һүҙһеҙ йыйырһығыҙ, ышанам, дүрт-биш йылдан, бәлки, унан да күберәккә һуҙылыр. Ә ул арауыҡта кем бар ҙа кем юҡ, тигәндәй...

- Дөрөҫ бытылдайһың, ысынлап та бер көнлөк өсөн тыуған күбәләктәр ише бер көнлөк хәстәрҙәр менән йәшәйбеҙ хәҙер, бөгөн барбыҙ, иртәгәһенә инде ағастай итеп һуҙып һалып, зыяратҡа алып китеп тә баралар...

- Бына шул шул. - Дауыт әйтелгәндәрҙе йөпләгәндәй һуҙҙы. - Шуға һәммәһен бөгөн, хәҙер үк, немедленно эшләп ҡалырға кәрәк, бына шул!

- Тел төбөңдө аңлап етмәнем, мырҙа, асыҡлаңҡырап һөйлә!

- Үткәндәге һөйләшеүгә кире ҡайтам. Ҡыҫынҡылыҡта йәшәйбеҙ бит, ә һинең бер үҙеңә ике бүлмәле фатир. Давай, алмашабыҙ. Алмашмайбыҙ, һеҙгә бер матур бүлмә табып бирәм. Фатирыңдың хаҡын тулыһы менән түләйем. Ул аҡса һиңә ҡәбер ташына ғына түгел, һаҡлап тотонһаң, әллә күпмегә етәсәк!

Өндәшмәй шымды бер аҙға. Дауыттың тәҡдимендә аҡыл ишараты бар һымаҡ. Ысынлап та, бер үҙенә ике бүлмә ни бысағыма! Йәнә квартплатаны түләү йылдың йылы ауырлашҡандан ауырлаша бара. Ярты пенсияһын тейерлек йота бит шул ҡабатлана килгән түләүҙәр. Квартплатаны түләйһең, капиталь ремонтҡа, утҡа, һыуға, газға аҡса сығарып һалаһың, унан ҡалһа, һалым органдары өҫкә менеп бара, үҙәгенә үтте, билләһи. Ә ул социализм осоронда тыуған кеше буларaҡ, һәр нәмәне теүәл башҡарырға, бурысҡа ҡалмаҫҡа, батмаҫҡа өйрәнгән.

- Ну как, есть ведь рациональное зерно в моих словах? - Әйткәнененә үтемлелеген һиҙгән Дауыт ҡабаланып һорай һалды.

- Уйларға кәрәк... Тиҙ генә ҡабул итәһе, ҡабалан эшләйһе эш түгел бит, иртәгә... Башты төҙәтәм дә, айыҡ баш менән, иртәгә...

- Иртәгә булғас иртәгә инде. - Ҡунағы ныҡышманы, ҡалҡып, кейемемә быcраҡ эләгеп сыҡмаһын, тигәндәй, салбарының арт яғын ҡаҡҡылап, иҙән таҡтаһын шығырҙата баҫып, тыңлаулы бала ише сығыу яғына ҡарай юрғаланы.

- Постой, брат! Туҡта әле... Ҡалған эшкә ҡар яуа, тиҙәр, бар, башты төҙәтергә бер ярты килтер ҙә, шунда һөйләшербеҙ...

- Ҡиммәтленән бер ярты, абзый! Бәлки, шунда уҡ юридические документы подпишем, ә?

- Ниндәй документтар тағы? - Аптырап, аңшайыңҡырап ҡалды Мозафар.

- Ҡалған эшкә ҡар яуа, тип үҙегеҙ яңы ғына әйттегеҙ ҙә баһа. Риза була ҡалһағыҙ, тип алдан сыймаҡлаштырып алғайным да.

- Кемдән?

- Таныш, бергә уҡыған юристан. Арыу егет ул, "Фемида" исемле юридик офис та асып ебәргән. Аралашып йәшәгәс беләм - белемле, ғәҙел.

- Бер әйттем бит, тағы ла ҡабатлайым, ғәҙелдәр юҡ әллә ҡасандан, шуны маңлайыңа киртеп ҡуй! - Көтмәгәндә яңынан күңеле болғанды ла, уҡшығанын уртлап, бәҙрәф яғына ҡарай юрғаланы.

Кире сыҡҡанында Дауыт ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай һаман урынында тора ине.

- Нимә, осаға сыҡҡан сиҡандай һаман һерәйгәнһең, күрәһең бит, ашҡаҙандағы барлы-юҡлыны унитазға бушаттым, ос, давай!

- Ҡайҙа?

- Ҡайҙа булһын, кибеткә, теге документтарыңды ла килтер! Үлеп барыла: ҡырҡҡа ярылырҙай кимәлдә баш сатнай, тотош тән дерелдәй.

- Һеҙ тигәндә мин иҙәндә, абзый, айн момент!

Ысынлап та Дауыт араҡының ҡиммәтлеһен, "Царь" яҙыулыһын алғайны. Шул шешә батшалай өҫтәл түренә менеп ҡунаҡланы, килтерелгән мул, сифатлы аҙыҡ-түлек теленеп, ҡырҡылып, асылып, теҙеп һалынды.

- Ҡой! - Ни тиклем генә эсе өҙөлөп барһа ла кеше килтергән һыйға үрелергә ҡыйманы.

Ярты ҡырлы стакан араҡы ауыҙ ҡыуышлығын, ҡыҙыл үңәсте ҡытыҡлап төшөп китте лә ашҡаҙанын наҙлы йылытып ебәрҙе, икенсеһе инде шундуҡ башына бәрҙе, зиһенен сафландырҙы, нуры ҡайтҡан, өмөтһөҙлөк япҡан күҙҙәрендәге шыйыҡ томанды таратты. Һиллектән, күңел һәм йән тыныслығынан ирәйҙе. Ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа һуҙылған рәхәтлек был, ары ни булырын, күҙ менән ҡаш араһында ялтлап алған алдатҡыс йәшен саткыһының бер аҙҙан ҡара, суйындай ауыр болоттар менән ҡапланырын да яҡшы белә.

Оҙаҡ ҡыялдылар өҫтәл артында; ашанылар, эстеләр, тик әңгәмәләре генә берекмәне, сөнки улар икеһе ике донъя кешеһе, береһе, теге, үткән быуат урталарында, коммунизм төҙөүсенең әхлаҡ кодексы алға һөрөлгән, уның эстәлеге һанға һуғылған һәм тайпылышһыҙ үтәлгән йылдарҙа тыуған, икенсеһе иһә СССР тигән дәүләт емерелгәндән һуң, алыш-биреш ҡанундары аңды томалаған, аҡса йәшәйеш менән хакимлыҡ итә башлаған осорҙа яралған зат, ә ошо айырма инде аҡ менән ҡара, изгелек менән яуызлыҡ, гонаһ менән иман төшөнсәләре ише һис ҡасан йәнәш ҡала алмай, ҡушылмай ҙа, бер килеп, бәлки, иманһыҙлыҡ ҡаҙанына һалып болғанырҙар, ул сағында инде заман ахрыһының ҡиәмәт көнө килер.

Ултыра торғас, бәлйерәй төштө, булмышын яңынан араҡының иҫерткес ҡеүәте биләне, шулай ҙа күңелле ине уға. Күңелләнгәндә инде ул гел бер үк йырҙы һуҙырға ярата. Был юлы ла ауыҙы ситтәренән һарҡҡан ялтыр шайыҡты усы менән һыпырып алды ла үтә лә моңһоҙ итеп көйләп ебәрҙе:

Әрмеләрҙә йөрөп сәс үҫтерҙем,

Сәскенәйем етте лә үрмәгә...

Туған телен икмәк-тоҙлоҡ кимәлендә белгән Дауытҡа был йыр оҡшаманы, зиһенен ҡуҙғытманы, ҡасан ғына тамамланыр икән был екһендергес тамаша, тигәндәй, ҡарашын ситкә йүнәлтте, оҙон итеп иҫнәп тә алды. Йыр тамамланғас, ҡыҙыҡһына ҡуйҙы:

- Абзый, видимо вы в армии служили?

- А как же, төньяҡ флотта, өс йыл, ә һин, шул, бер йыл этеп-төртөп йөрөгәнһеңдер инде?

- Мин вообще не служил. Зачем? Кемде һаҡларға, ә? Это глупо.

- Нимә глупо? Армияла хеҙмәт итеүме, әллә боҫоп ҡалыуымы?

- Бына һеҙ, мәҫәлән, өс йыл буйы диңгеҙҙә плавали, ниндәй маҡсат менән?

- Илемде һаҡланым, еремде ҡурсаланым, яҡындарым, туғандарым имен хеҙмәт итһен, тыныс йоҡлаһын, тинем.

- То, что вы говорите - пустышка, идеология бывшего социализма, абзый.

- Һин... һин үҙең пустышка, буш ҡыуыҡ, белдеңме? - Кинәт ҡалҡын ҡаршыһында ултырған Дауыттың яғаһынан бөрөп алып ҡалҡытты, йоҙроғон төйөп киҙәнде.

- Довольно, абзый, довольно, и пошутить нельзя! Һыйлап ултырам, ә һин минең яғанан алаһың!

Ҡыпһыуырҙай ҡаты бармаҡтарын яҙып, Мозафар кире урынына гөрһөлдәне. "Дөрөҫ, ниңә ерле юҡҡа янырға әле, алдында һый, тағы ни кәрәк?" Оҙаҡҡа һуҙылған уңайһыҙ тынлыҡтан һуң телен көрмәлдереп, ғәфү үтенгәндәй ҡунағына өндәште:

- Теге документыңды әйтәм, ғәҙел яҙылған, тинеңме?

- Комар нос не подточит, тиҙәр урыҫтар!

- Улайһа килтер! Тик авторучка-фәлән, хатта ҡәләм осмото ла юҡ минең фатирҙа!

- Бөтәһе лә әҙер, все заранее подготовлено!

Алдына һалынған ҡағыҙҙарҙы уҡып мәшәҡәтләнмәй генә ҡултамғаһын сыймаҡланы ла башын өҫтәлгә һалды...

Бына хәҙер уның бында ярты йыл самаһы йәшәп ятыуы. Бүлмәле лә булды, ҡатынына ҡәбер ташы ҡуймалы аҡса ла ятты усына. Шунан артығы эләкмәне. Судлашып йөрөү файҙаһыҙ икәнен аңлап, маңлайға яҙғаны ошолор, тип ҡул ғына һелтәне.

**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

✓ ***"Мин һине яратам!.." тип өс һүҙ әйтер өсөн генә лә сәхнәгә сыҡҡаным булды. Асылда, иң ауыр ролем дә шул булғандыр әле, бәлки. Сәхнәлә һүҙһеҙ генә, күҙ ҡараштарың менән генә уйнау бер артисҡа ла еңел түгел.***



ИЖАДХАНА

**Шаулап-гөрләп уҙҙы Илшат Йомағолов исемендәге Стәрлетамаҡ Башҡорт драма театры актрисаһы Айгөл Зөбәйҙуллинаның юбилей бенефисы. Тап үҙе һымаҡ: матур, йыйнаҡ, баҫалҡы, тотанаҡлы. Һоҡланғыс! Була бит шундай төҫ тә ташламаҫ, холоҡ-ҡылыҡтары менән дә күркәм ҡатындар! Йылдар Айгөл алдында, ысынлап та, көсһөҙ. Йырҙарҙа йырланғанса, "кемдәр генә ғашиҡ, ай, булмаған"дыр инде үҙенә! Альберт Шаһиевтың "Сәлимәкәй" йырына төшөрөлгән клипта ла Сәлимәкәй булып Айгөл йылмая, "Усаҡ" йырына төшөрөлгән видеотаҫмала ла уның йылы ла, һағышлы лы ҡарашы оҙата моңдо.**

# СТӘРЛЕТАМАҠ ТЕАТРЫНЫҢ...

## һоҡланып туйғыһыҙ Алмаҡайы ул



Айгөл Зөбәйҙуллина юбилейы айҡанлы Михаил Задорновтың "Килдең, киттең - хуш, байғош" ("Последняя попытка") әҫәре буйынса ҡуйылған спектаклдә (режессеры Айҙар Зарипов) төп героиня Ирина Валерьевна ролен башҡара. Никахтарына теүәл 20 йыл булған көндө иренең хыянаты тураһында ишетә Ирина Валерьевна. Кемдән әле - иренең бер нисә йыл "яратышып" йөрөгән һөйәркәһенән. Бына хәҙер сәхнәлә һис юғы дауыл ҡубырға тейеш кеүек! Ошо хәлде башҡаса нисек күтәрһен егерме йыл ғүмерен иренә бағышлаған ҡатын? Нисек тыныс ҡына үткәреп ебәрһен? Айгөл режиссерҙы тыңлағанмы, режессер Айгөлдөмө - уныһы беҙгә ҡараңғы, әммә сәхнәлә барған ваҡиғаларҙың әйләнешендә мин Ирина Валерьевнаны түгел, Айгөлдө таныным! Үҙ яҙмышына яҙған һынауҙы ла бар донъяға яр һалмай ғына, тыныс ҡына үткәреп ебәрергә көс тапҡан Айгөл, баҫалҡы күренһә лә, ана ниндәй көс-көҙрәткә эйә икән: иренең хыянатын тыныс ҡына ҡабул итеүсе героиняһының яҙмышын шул тиклем ышаныслы итеп уйнап буламы ни юғиһә! Һоҡландырҙы Ирина Валерьевна ролендәге Айгөл! Яҙмышына яҙған һынауҙы лайыҡлы үтеүе, лайыҡлы еңеүе менән һоҡландырҙы!

Бынан утыҙ йылдар самаһы элек, әле Республика мәҙәниәт техникумында Стәрлетамаҡ ҡалаһында яңы асылған Башҡорт драма театры өсөн йыйылған махсус курста уҡып йөрөгән йылдарында, Әнисә Дилмөхәмәтованың "Йософ һәм Алмаҡай" әкиәтендәге Алмаҡай роле менән килеп инә ул сәхнәгә. Ошо әкиәти Алмаҡайы инселәгән яҙмышымы - утыҙ йыл дәүерендә бер тапҡыр ҙа кире эмоциялар тыуҙырған ролдәр уйнарға тура килмәй уға: һәр роле һылыулығын, нәзәҡәтле һын-ҡиәфәтен, матур холҡон сағылдырыр өсөн махсус яҙылған кеүек. "Һәр ролемде яратып башҡарам. Үҙемде үҙ темпераментыма тура килмәгән, ярһыу характерлы, үҙ холоҡ-ҡалыбымдан айырылыбыраҡ торған ролдәрҙә лә һынап ҡарағым килһә лә, режессер мине теге йәки был ролдә нисек күрергә теләй, шул ҡалыпҡа һыйырға тырышам. Минең өсөн ролдең бәләкәйе, ҙуры юҡ. Булат Рафиҡовтың "Париж башҡорто" әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән спектаклдә (режиссеры Ә. Абушахманов) "Мин һине яратам!.." тип өс һүҙ әйтер өсөн генә лә сәхнәгә сыҡҡаным булды. Асылда, иң ауыр ролем дә шул булғандыр әле, бәлки. Сәхнәлә һүҙһеҙ генә, күҙ ҡараштарың менән генә уйнау бер артисҡа ла еңел түгел. Тап шундай ролдәр кимәлендә лә, кемлегендә лә һынап ҡарау өсөн биреләләр..."

Ошо һүҙҙәренән һуң, "Артист булыу уйымда ла юҡ ине" тигән әңгәмәсемдең яҙмышын театр менән бәйләүен осраҡлылыҡ тип ҡабул итә алманым. Юҡ, осраҡлы ғына килеп инмәгән тетрға Айгөл, күңелен һәр ваҡыт сапсып торған хыялын эҙләп барғандыр, сәхнә тартҡандыр уны. Ата-әсәһе лә ауыл сәхнәһенән айырылмай: әсәһе бейей, атаһы йырлай, икәүләшеп спектаклдәрҙә уйнайҙар, ауылға килгән әртистәр уларға фатирға төшә. Бай мәҙәни тормош эсендә ҡайнаған Айгөлдөң күңелендә сәхнәгә ынтылыу йәшәмәгән тиһегеҙме ни! Йәшәгән, әлбиттә! Радиопостановкалар тыңлай торғас, артистарҙы тауыштарынан уҡ танып бөткән, улар уйнаған ролдәрҙе аулаҡ ҡалып ҡабатлап алырға ла күнеккән. "Минең артист булғым килә!" - тип яҡындарына ғына түгел, хатта үҙ-үҙенә лә ҡысҡырып әйтеү өсөн тәбиғи баҫалҡылығын ғына еңә алмағандыр. Күңеле менән Гөлли Мөбәрәкова, Нурия Ирсаева, Илһөйәр Ғизетдинова, Таңсулпан Бабичева кеүек сәхнә йондоҙҙарын илаһи заттар итеп ҡабул итеп үҫкән, ҡайҙа ти ул уларға тиңләшергә, улар юғарылығына ынтылырға тырышыу! Ағаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Юнир Ғәйнуллин да, бәләкәйҙән гармунынан айырылмай сәхнәлә үҫһә лә, һуңлап ҡына аяҡ баҫа бит театр сәхнәһенә. Ана хәҙер бер ғаиләнән ике артист! Юҡ, осраҡлылыҡ түгел уларҙың театр сәнғәтен үҙ итеүе. Булмышынан ҡасырға тырышып, башҡа һөнәр һайлап та ҡарай. Мәҙәниәт техникумының бейеү бүлегенә уҡырға ингәс икәс, ят ҡалала, ят ерҙә бер үҙе ҡалыуҙан, туғандарынан айырым йәшәүҙән ҡурҡып, Өфө ҡалаһына төпләнгән апайҙары-ағайҙары эргәһенә барып һыйынып, ашнаҡсы һөнәрен үҙләштерә. Ауылдашы, һәүәҫкәр композитор Рәмил Ғимраниҙың: "Айгөл, һинең урының сәхнәлә!" - тигән һүҙҙәре уның күңелендә ойоп ятҡан сәхнә шауҡымын уятып ебәрә булһа кәрәк, Мәҙәниәт техникумына яңынан юллана. Был юлы - театр студияһына. Илшат Йомағолов, Хәмит Яруллин, Гөлдәр Ильясова кеүек билдәле сәхнә остаздарының мәктәбе аша үтеү бәхете яҙа уға. Шунан бирле бына 28 йыл сәхнәлә. Башҡарған ролдәре утыҙҙан артып киткән. Быларҙан тыш, бихисап әкиәттәрҙә уйнай, концерттарҙы алып барыусы ла була. Театрҙың төрлө өлкәләргә гастролдәре ваҡытында, үҙенә тәғәйен ролдәренән тыш, бейеп тә хайран ҡалдыра ул тамашасыны.

Юбилей кисәһенә тиклем осрашып әңгәмәләшкәндә үтә лә сабыр, баҫалҡы, тыйнаҡ күренде минҙә Айгөл. Үҙ теләге менән зооволонтер булып, ҡарауһыҙ ҡалған эттәрҙең йә бесәйҙәрҙең яҙмышын хәл итешеп йөрөүенә аптырамаҡным, ә бына ҡыйып ҡарағыһыҙ сибәр ҡатындың баҫалҡылығы ғәжәп тойолдо. Яратып кейәүгә сығып ҡорған тәүге ғаиләһендә, яҡынынан аңлау тапмай, күңел яралары кисерә. Яҙмышының шул өлөшө күҙҙәренә сабыр һағыш булып яғылып ҡалғандыр тип уйлап, шәхси тормошо хаҡында һорауҙар бирергә ҡыйманым. Сәхнәнән уның тормош иптәше: "Айгөләм, ҡәҙерлем, мин һине яратам!" - тип өндәшкәс, ҡыҙыҡһыныуымды йәшерә алманым... Баҡһаң, яҙмыш уны ике бала менән йәшләй генә тол ҡалып, донъя йөгөн яңғыҙы тартҡан Филүс Иркәбаев менән осраштыра. Бына байтаҡ йылдар инде ул үҙенең - бер, Филүсенең ике балаһына әсәй булып йәшәй. Филүс менән сәстәрен сәскә бәйләгәненә бер минут та үкенгәне юҡ. Филүс эргәһендә һаҡлаулы, яҡлаулы ул, икәүһе бер бөтөн булып йәшәйҙәр, шөкөр, балаларының да күңелдәре бөтөн. Сәхнә тултырып сығып баҫҡан үҙенең туғандары ла, иренең туғандары ла һоҡландырҙы. Эй бәхетле ине Айгөл сәхнәлә! Күҙҙәрендә теге һағыштың осмотон да күрмәнем. Сәхнәһе, тамашасылары, ғаиләһе, туғандары, коллегалары менән бәхетле ине! Ә һылыу йөҙөнә йылмайыу, бәхетле йылмайыу нисек килешә! Стәрлетамаҡ театрының ҡарап туйғыһыҙ Алмаҡайы булып баҫып торҙо ул. Бәхетле йылмайып, тамашасыларына бәхетле минуттар бүләк итте.

Стәрлетамаҡ башҡорт театрына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булып инде утыҙ йылға яҡын ошо театрға тоғро хеҙмәт иткән Айгөл Зөбәйҙуллинаның ауыҙ тултырып әйтерлек маҡтаулы исеме булмауы ғына эсте бошорҙо. Уңайһыҙ булһа ла юбилярҙың үҙенән һораным был турала. Уның яуабы Илшат ағайса ярһыу, Айгөлсә аҡыллы булды: "Беҙ Илшат Йомағолов мәктәбен үттек. "Бер ҡасан да дан, дәрәжә, аҡса хаҡында уйламағыҙ. Эшләгән эшегеҙгә хаҡ һорап, дәрәжәләр тураһында уйлай башланығыҙмы, һеҙ ижад кешеһе булыуҙан туктайһығыҙ", - тип өйрәтте ул беҙҙе. Минең ул турала уйлағаным юҡ. Булғаны менән бәхетлемен".

Айгөлгә матурлығына бәрәбәр һөнәри бәхет тә теләйем. Театр тарихын яҙыусылар маҡтаулы исемдәргә, һис шикһеҙ, лайыҡ.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

ТАМАШАЛАР

# КҮҢЕЛ ИХТЫЯЖЫ



**Бала бишектә ята. Ата-әсәһе, олатай-өләсәйҙәр, туғандары сәңгелдәк тирәләп балаға спектакль күрһәтә. Актерҙар күп, тамашасы берәү генә. Бала үҫә, тәпәй баҫып атлап китә, көн дә һөнәр арттыра. Ата-әсәһе, олатай-өләсәйҙәр, туғандары ҡыҙыҡһынып баланы күҙәтә. Актер берәү, тамашасылар - күп. Тормош дауам итә! Бушҡамы ни, бөйөк Шекспир, тормош - театр, кешеләр - актерҙар, тип әйтмәгән. Ысынлап та, кешеләрҙә төрлө тамашалар ҡарау ихтыяжы бар, улар шул күңел талабын ҡәнәғәтләндермәһә, буш һауыт һымаҡ буласаҡтар.**

Сибайҙарға күңел ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар: сағыштырмаса ҙур булмаған ҡалала ике театр эшләй! Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры йәше буйынса ҡаланың үҙенән дә оло, "Сулпан" балалар театры республикала берҙән-бер балалар театры. Ҙур рухи байлыҡ бит был!

Байрамдары яҡынлашыуын иҫәпкә алып, күптән түгел драма театрының баш режиссеры итеп тәғәйенләнгән Денис Нурғәлингә уларҙың тын алышы тураһында һорашып мөрәжәғәт иттем:

- Мәскәүҙә Михаил Щепкин исемендәге юғары театр институтын тамамлағас, 2007 йылда Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрына эшкә килдем. Хеҙмәт юлын башлаған театрыма, яҙмыш юлдары ситкә алып китһә лә, кире әйләнеп ҡайтыу артыҡ уйланыуҙар тыуҙырманы. Бай тарихлы театрҙың ижади юлы уңышлы ваҡиғаларға бай булырға тейеш, тип уйлайым. Ваҡыт бик тиҙ үтә, әле генә театрыбыҙҙың 90 йыллығы булғайны, киләһе юбилей ҙа тау артында түгел. Төп иғтибарҙы репертуарға йүнәлтеп, эш планын аныҡ, үҙенсәлекле итеп төҙөп, театрҙың эшмәкәрлеген йәнләндереү - төп маҡсат. Драма театры булыу гел генә драма әҫәрҙәрен сәхнәләштереү тигәнде аңлатмай, репертуарҙа төрлө жанрлы спектаклдәр булырға тейеш.

Театрҙың баш режиссеры булараҡ беренсе спектаклем Наил Ғәйетбайҙың "Һинән - фатир, минән - ир" комедияһы буласаҡ. Режиссер ҡарамағынан сығып, әҫәрҙе гротеск алымдары аша сағыуыраҡ итергә тырыштым, ысын тормошта булмаҫтай ваҡиғаларҙы ҡуйырттым. Комедияның сюжетында хәҙерге замандағы төп проблема сағыла. Бөгөнгө көндә уңышлы бизнес алып барған ҡатын-ҡыҙҙар күп. Эштәре көйлө, йәшәр урыны, машинаһы, аҡсаһы - бөтөн нәмәһе бар, ҡайҙалыр барып ял итеп килә алалар, ә һөйөү бәхете, бала бәхете күрә алмайҙар. Шулай уҡ кейәүгә сығып, бала табып, йәшәр урын тапмай, бер мөйөштән икенсеһенә күсеп йөрөргә мәжбүр булғандар ҙа бихисап. Ҡыҫҡаһы, әлеге спектаклдә социаль контрасты торлаҡ проблемаһының киҫкенлегенә баҫым яһап һүрәтләргә тырышабыҙ. Комедия булғас, әлбиттә, уйын-көлкө аша, гротеск булғас, башҡа һыймаҫлыҡ ваҡиғалар юҫығында күрһәтәсәкбеҙ. Бөтәһен дә алдан асып һалмайым, тамашасылар килеп ҡарарҙар, баһа бирерҙәр. Премьера 27 мартҡа - Халыҡ-ара театр көнөнә планлаштырылған. Рәхим итегеҙ!

**Урал ЙОСОПОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КАРТУФТЫҢ ФАЙҘАҺЫ...

■ Башҡа йәшелсәләргә, хатта ҡайһы бер еләк-емеш һәм сәтләүектәргә ҡарағанда, картуфтың файҙаһы күберәк. Ул ҡан баҫымын да нормаға килтерә. Диетолог Сингрид Гибсон һәм Британияның диетологтар ассоциацияһы вәкиле Сиан Портер билдәләүенсә, картуфта көнбағыш һәм сәтләүектәргә ҡарағанда - селен, банан менән сағыштырғанда 5,5 тапҡырға - күҙәнәклек, өс авокадоға ҡарағанда - С витамины күберәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, гипертония менән яфаланыусыларға көнөнә ике тапҡыр картуф ашау файҙалы. Ә бына картуфтың һимереүгә килтереүе тураһындағы хәбәр уйҙырма ғына булып сыҡҡан.

■ Көнсығыш һәм Урта диңгеҙ халыҡтары аш-һыу әҙерләгәндә ятрап ҡулланған зәғәферән (шафран) тәмләткесе оло кешеләрҙең күҙҙәрен һуҡырайыуҙан һаҡларға ярҙам итә. Австралия һәм Италия ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр ваҡытында оло йәштәге кешеләр өс йыл дауамында зәғәферән ҡулланған һәм уларҙың күреү һәләте бермә-бер яҡшырған. Был тәмләткесте ҡулланыуҙан туктау менән күреү һәләте лә насарая башлаған. Ғалимдар билдәләүенсә, зәғәферән оло йәштә һуҡырайыуҙан ҡотҡарып ҡына ҡалмай, ә тәбиғи ҡояштан һаҡлаусы күҙлек ролен дә үтәй һәм күҙҙәрҙе сағыу ҡояш нурынан зарарланыуҙан һаҡлай.

■ Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины ҡытлығы һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

■ Әгәр ҙә асыҡ һауала булғандан һуң тирегеҙ һиҙелерлек алһыуланһа, тимәк, организм 20000 ЕД D витаминына байыған. Тик нисек зыян килтермәҫлек итеп дөрөҫ ҡыҙынырға һуң? Тәүҙә ҡояшта 10 минут самаһы ғына ҡыҙыныйһыҙ һәм көн һайын был ваҡытты 1-2 минутҡа арттыра барығыҙ. Тап ошолай итеп ҡыҙынғанда ғына һаулыҡты нығытырға була. Ҡояш нурҙары аҫтында оҙаҡ булыу тире яман шешенә килтереүе бар. Ҡайһы бер үләндәр һәм дарыуҙар тиренең ҡояшҡа тәьҫирлеген көсәйтеүен онотторға ярамай. Был исемлеккә һары мәтрүшкә, йөрәк ауырыуҙарынан дарыуҙар (кордарон), бөйәр өҫтө биҙе гормондары инә.

■ Ауырлыҡты нормала тотоу өсөн күпме түгел, ҡасан ашау мөһимерәк, ти Солк биологик тикшеренеүҙәр институты ғалимдары. Сысҡандарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙә тәүге төркөмгә көндәҙ, 8 сәғәт дауамында ғына туҡланырға мөмкинлек биргәндәр. Икенсе төркөм тәүлектең һәр өлөшөндә лә туҡлана алған. Тәүге төркөмдәге сысҡандар икенсе төркөм менән бер үк күләмдәге аҙыҡты ашап бөтһә лә, уларҙа һимереү һәм башҡа метаболик ауырыуҙар теркәлмәгән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, һимереү аҙыҡ ҡабул итеү графигы һәм организмдың биологик сәғәттәренең тура килмәүе менән бәйле.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҒАФУРИҘАР...
## йәшәү дәрте менән һоҡландырҙы

**- Олатай! Мин ҡыуанyслы хәбәр алып килдем! Майҡыбей үҙенең яугирҙары менән йәйләүгә яҡынлашып килә! Һеҙгә уларҙы ҡаршы алыу хәстәрен күрергә ҡушты!**
**- Шулаймы? Ярай улым, яҡшы хәбәрең өсөн ауыҙыңа бал да май! Йәмәғәт! Беҙгә бер юлы ике шатлыҡ йылмайҙы бит әле. Улым Майҡыбейҙең балаһы тыуҙы!**

Оҙаҡламай ат тояҡтары дөбөрҙәүе ишетелә. Тирмәләр янында, бала тыуыуына ҡыуанып, күңелле мәшәҡәттәр менән йүгерешкән бисә-сәсә, яугирҙың ҡайтыуын көтөп торған ир-ат тынып ҡала. Майҡыбей, йыраҡтан атын саптырып килеп, улар алдына килеп туҡтай...



Ғафури районы Оло Үтәш ауылында ошондай тарихи күренеште сәхнәләштереү менән башланып киткән сара ул көндө бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр. "Айыҡ ауыл - 2023" республика конкурсында ҡатнашып, ауыл халҡы башҡорттоң борондарҙан килгән әхлаҡи нигеҙҙәренә, йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә тоғролоғон раҫланы.

Һуңғы йылды ғына алғанда ла, әлләкүпме изге эштәр башҡарылған был ауылда. Шәжәрә байрамы үткән, Йәшлек паркында балалар майҙансығы асылған, юлдар төҙөкләндерелгән. Конкурс сиктәрендә сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалаған, айыҡ тормош алып барыуға йүнәлтелгән саралар, кисәләр, йәштәр, мәктәп уҡыусылары, ауыл халҡы менән әңгәмәләр, "Мәргән уҡсы" ярышы, "Берҙәм ғаилә" консультация үҙәге, "Балыҡ тотоу" ярышы уҙғарылған. Был байрамда иһә ошо сараларға бер ни тиклем йомғаҡ яһалды: район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гүзәл Байдәүләтова, Ғафури районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты етәксеһе Фаил Зәйнетдинов төрлө бәйгеләрҙә еңеүселәргә ҡотланы, бүләктәр тапшырҙы.

Сәхнә түренә алыҫ араларҙы яҡын итеп килеп еткән баш ҡала ҡунаҡтары саҡырылды. Ханты-Манси автономиялы округы Югра башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы ағзаһы, "Торатау" Ишембай яҡташтар төбәк ойошмаһы рәйесе Рәүәт Ҡолмәнбәтов, республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, шағир, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы, Ғ.Сәләм премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Хисмәтулла Юлдашев, шағирә, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре Тамара Юлдашева ошо гүзәл башланғысты, ауыл эшсәндәренең киләсәккә ҡарап йәшәүен хуплап сығыштар яһаны.

- Ошолайтып ауылдарыбыҙҙы күтәреп, юлдар һалып, балалар өсөн тәрбиәүи саралар уҙғарып, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ветерандарҙы иҫкә алып, гөрләтеп тормошто алға ебәрергә тырышып йәшәһәк, ауылдарыбыҙ ҙа йәшәр, төҙөкләнер, тип ышанам, - тине Рәүәт Абдулхаҡ улы.

Халыҡта рухи күтәренкелек, башлаған юлынан тайпылдырмаҫ ышаныс, йәшәү дәрте барлығын күрһәтте был матур сара.

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ.**





БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҠАН ХӘТЕРЕ...
## хаталанмай



**Борон-борон заманда, тип башлана әкиәттәр ҙә, батырҙар, шәхестәр тураһындағы ҡайһы бер замансa хәтирәләр ҙә. 82 йәшлек инәй булараҡ, ул борон-борон заманды беләм мин. Хәтирәләрҙәге шәхестәр, батырҙар был донъянан үтеп бөтөп бара, шулай ҙа минең хәтеремдә һаҡланалар әле.**

Яҡташым Сәйҙә: "Элек Бөрйәндә лә йөрөгәндәр бәһлеүәндәр..." тип һөйләй торғайны. 1-се Балалар йортонда үҫһәм дә, шәжәрәмде беләм. Олатайым Шәмсетдиндең 3 улы, 2 ҡыҙы булған. Улдары - Ахунйән (атайым), Рәхимйән, Зәкирйән. Рәхимйән ағайым ысын бәһлеүән булған, уның күтәргән ташын үлсәп ҡарағанда, центнерға 2 кг ғына етмәгән. Ул аҡ ташты 3 кеше тубыҡ бейеклегенә генә күтәрә алған. Был таш Бөрйән районы Килдеғол ауылы музейында һаҡлана. Эйе, Бөйөк Ватан һуғышына тиклем ирҙәр бәһлеүәндәр кеүек оҙон буйлы, киң яурынлы булғандар. Булғандар ҙа, яу яландарында ятып ҡалғандар...

Иҫән ҡалғандарын иһә, Өфө урамдарында үҙемә күрергә яҙҙы, шөкөр. Бына Ғата ағай Сөләймәнов трамвайҙа башҡорт балаларына ҡурай моңонoң серҙәрен аңлатырға, уҡытырға китеп бара. Киләсәктә уның ошо ҡурайсы малайҙарынан дипломлы ҡурайсылар сығасаҡ. Бына Хөсәйен ағай Әхмәтов филармонияға ашыға. Уның хәстәре иһә, башҡорт моңон түкмәй-сәсмәй, киләһе быуынға еткереү. Ә мин, үсмер ҡыҙ, шул Бәһлеүәндәр менән һоҡланып йөрөп ятам. Улар оҙон буйлы, киң яурынлы, өҫтәүенә, сал сәсләләр. Шағирҙарыбыҙ ҙа бәһлеүән кеүҙәле - Муса Ғәли, Мостай Кәрим, Назар Нәжми... Улар, Бәһлеүәндәр, әҙәбиәткә һәм сәнғәткә тотош төркөм булып килә торғайны ул заманда...

Хәҙер таланттар һирәкләп тыуамы икән - тотош тулҡын булып, яңылыҡ булып килеүселәр күренмәй. Был ысын Уҡытыусылар, Остаздар булмауынанмы икән?

Беҙҙе һуғыш балалары тип атанылар. Шағир Дамир Шәрәфетдинов:

"Зәғифләнгән заман балалары,
Ҡайҙан икән һеҙгә көс кергән?.." - тип яҙғайны. Ә мин беләм: ҡан хәтеренән, шәжәрәләребеҙҙе, тарихыбыҙҙы белеүҙән, йәнәшәбеҙҙә Бәһлеүәндәр, ысын Остаздар булыуынан килә ине ул көс. Ҡан хәтере хаталанмай...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# РАМАҘАН АЙЫ ҺӘМ...

## ураҙа тотоу тураһында ҡайһы бер хәҙистәр



* * *

Әбү Һурайраға Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Ураҙа - ул йәһәннәм утынан ҡотҡарыусы пәрҙә, ураҙа тотҡан кеше насар һүҙ һөйләмәһен һәм наҙандарға оҡшамаһын. Кем дә булһа уның менән талашырға теләнә йәки уны асыуландыра башлаһа, ул ике таҡкыр: "Мин Ураҙа тотам!" - тип әйтһен. Мин йәнем Уның ҡулында булған Зат менән ант итәм: Ураҙа тота торған кешенең ауыҙынан килгән еҫ Аллаһы Тәғәлә өсөн мускустың хуш еҫенән дә тәмлерәк һәм Ул: "Ул Минең өсөн ризыҡтан, эсемлектән һәм үҙенең дәртенән баш тарта, был Ураҙаны ул Минең өсөн тота һәм Мин уға быының өсөн әжерен бирәсәкмен. Ә яҡшы эштең әжере ун тапҡыр артығыраҡ буласаҡ!" - тип әйтер", - тигән.

* * *

Сәһл риүәйәте: "Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Ысынында, йәннәттә Әр-Раян тигән ҡапҡалар бар һәм Ҡиәмәт көнөндә унан бары тик ураҙа тотҡан кешеләр генә инәсәк. "Ураҙа тотҡан кешеләр ҡайҙа?" - тип һорағас, улар уянасаҡ һәм был ҡапҡанан уларҙан башҡа берәү ҙә инмәйәсәк. Улар йәннәткә ингәс, ҡапҡалар бикләнәсәк һәм унан бүтән бер кем дә инә алмаясаҡ", - тип һөйләгән.

* * *

Әбү Һурайра шулай тип тапшырған: "Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Рамаҙан еткәс, йәннәт ишектәре асыла!" - тигән. Икенсе хәҙистә Бәйғәмбәр: "Рамаҙан айы еткәс, күктең ҡапҡалары асыла, ә йәһәннәм ҡапҡалары бикләнә һәм шайтандар сылбыр менән бәйләп ҡуйыла", - тигән.

* * *

Әбү Һурайра (Аллаһ унан разый булһын) тапшырыуынса, Аллаһтың илсеһе: "Әгәр кеше ялғанлауҙан һәм алдау менән эш итеүҙән тыйылмаһа, Аллаһҡа уның ашау-эсеүҙән баш тартыуы кәрәк түгел", - тигән.

* * *

Әбү Һурайра әйтеүенсә, Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Һеҙҙең берегеҙ ҙә рамаҙанға бер, ике көн ҡала ураҙа тота башламаһын. Был уның өсөн ғәҙәти хәл булһа ғына (йәғни даими ураҙа тотһа ғына) ул әлеге ваҡытта ураҙа тота ала",- тигән.

* * *

Һади бине Хәтим риүәйәте: "...Аҡ еп менән ҡара еп айырыла башлағансы..." тигән аят ингәс, мин аҡ һәм ҡара бауҙы ҡулланырға уйлап, уларҙы мендәр аҫтыма ҡуйҙым. Төндә уларға ҡараным, ләкин бер нәмә лә айыра алманым. Иртә менән Бәйғәмбәр янына килеп, был турала һөйләнем. Ул (уға Аллаһтың сәләме булһын) "Был төндең ҡараңғылығы һәм көндөң яҡтылығы!" - тине".

* * *

Әнәс бине Мәлик тапшырыуынса, Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Таң алдынан ашағыҙ, сөнки ул - рәхмәт (теләк)", - тип әйткән.

* * *

Әбү Һурайра әйтеүенсә, Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Әгәр ҙә кеше Ураҙа ваҡытында онотоп ашаһа йәки эсһә, ул кеше ураҙа тотоуын дауам итһен, сөнки Аллаһ уны ашатҡан да, эсерткән дә", - тигән.

* * *

Әбү Һурайра риүәйәтенән: "Бер ваҡыт беҙ Бәйғәмбәр менән ултырғанда уның янына бер кеше килде лә: "Әй, Аллаһтың илсеһе! Мин һәләк булдым!" - тине. Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Нимә булды?" - тип һораны. Теге кеше: "Ураҙа ваҡытында мин ҡатыныма яҡынлыҡ ҡылдым", - тине. Бәйғәмбәр: "Һинең иреккә ебәрерлек ҡолдарың бармы?" - тип һораны. Ул: "Юҡ", - тине. Бәйғәмбәр янынан: "Һин ике ай тотош ураҙа тота алаһыңмы?" - тип һораны. Ул: "Юҡ", - тине. Бәйғәмбәр янынан: "Һин алтмыш мохтаж кешене ашата алаһыңмы?" - тине. Тегеһе: "Юҡ", - тип яуап бирҙе. Шунда Бәйғәмбәр күпмелер ваҡыт сабыр итеп торҙо, ә беҙ уның янында ултырыуҙы дауам иттек. Уға хөрмәләр тултырылған пальма япраҡтарынан яһалған кәрзин килтерҙеләр. Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Кайҙа теге кеше?" - тип һораны. Ул: "Мин бында", - тине. Шунда Бәйғәмбәр: "Ошоно ал да саҙаҡа итеп тарат", - тине. Теге кеше: "Әй, Аллаһтың илсеһе! Мин быны үҙемдән ярлыраҡ кешеләргә таратырға тейешме? Аллаһ менән ант итәм, Мәҙинәлә минекенән дә ярлыраҡ ғаилә юҡ бит", - тип һораны. Быны ишеткәс, Бәйғәмбәр тештәре күренерлек итеп көлдө, ә унан: "Уларҙы үҙ ҡатыныңа ашат", - тине".

* * *

Ибн Ғаббас әйтеүе буйынса, Бәйғәмбәр ихрамда булғанда ла, ураҙа тотҡанда ла ҡан алдыртҡан.

* * *

Бәйғәмбәрҙең ҡатыны Ғәйшәнең риүәйәте буйынса, бер ваҡыт Хәмзә бине Ғәмр әл-Әсләми Бәйғәмбәрҙән: "Миңә юлда ураҙа тоторға кәрәкме?" - тип һораған. Ә ул һәр ваҡыт ураҙа тота торған кеше булған. Бәйғәмбәр (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Теләһәң - тот, теләмәһәң - тотмаһаң да була", - тип яуап биргән.

* * *

Әбү-Дәрдә риүәйәте: "Бер ваҡыт беҙ Бәйғәмбәр менән (уға Аллаһтың сәләме булһын) бик эҫе көндө юлға сыҡтыҡ, эҫелектән кешеләр баштарын ҡулдары менән ҡаплай инеләр. Бәйғәмбәрҙә һәм ибн Рәвәхиҙә һанамағанда, беҙҙең арала ураҙа тотоусы кешеләр юҡ ине".

* * *

Жәбир бине Ғабдуллаһ риүәйәте: "Бер ваҡыт Бәйғәмбәр юлда булғанда кешеләрҙең бер әҙәмде ҡояштан ҡаплап торғанын күргән. Ул (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Нимә булды?" - тип һораған. Кешеләр: "Был кеше ураҙа тота", - тигәндәр. Бәйғәмбәр: "Юлда булғанда тотҡан ураҙаның тәҡүәлеккә бер ниндәй ҡатнашы юҡ", - тип әйткән".

* * *

Сәһл бине Сәғд тапшырыуынса, Аллаһтың Пәйғәмбәре (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Мосолмандар ауыҙ асырға ашығыуҙан туктағансы бәрәкәттә буласаҡтар", - тигән.

* * *

Әбү Сәғид әйтеүенсә, ул Бәйғәмбәрҙең (уға Аллаһтың сәләме булһын): "Ауыҙ асмайынса Ураҙа тотмағыҙ, әгәр ҙә берәрегеҙ шулай эшләһә, уның ураҙаһы сәхәр ваҡытынан да артыҡ дауам итмәһен", - тигәнен ишеткән.

* * *

Әбү Сәғид әл-Худри риүәйәте: "Бер мәл беҙ рамаҙандың икенсе ун көнлөгөндә Бәйғәмбәр менән мәсеттә ҡалдыҡ. Ә егерменсе көндө иртә менән ул унан сыҡты һәм беҙгә мөрәжәғәт итеп: "Үҙ ваҡытында миңә Ҡәҙер кисәһе күрһәтелгәйне, ә һуңынан уны миңә онотторҙолар. Был төндөң бәрәкәтен һуңғы ун көндөң таҡ көндәренән эҙләгеҙ. Шулай уҡ мин төшөмдә һыуҙа һәм ҡыҙыл балсыҡта намаҙ уҡығанымды күрҙем. Бәйғәмбәр менән аулаҡ ҡалған кешеләр мәсеткә кире ҡайтһындар", - тине, һәм беҙ ҡайттыҡ. Был ваҡытта күктә бер болот та юҡ ине. Кинәт күк йөҙө болот менән ҡаплана башланы һәм бик ҡаты ямғыр башланды. Мәсеттең түбәһенән һыу аҡты, сөнки ул ҡоро пальма япраҡтарынан ғына яһалғайны. Намаҙ башланғанда мин Бәйғәмбәрҙең һыуҙа һәм ҡыҙыл балсыҡта намаҙ уҡығанын күрҙем. Шулай уҡ уның маңлайында ҡыҙыл балсыҡ эҙҙәрен дә күрҙем".

**(Сахих Бохари хәҙистәр йыйынтығынан).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

**Байығыуҙың беренсе ысулы: "Көшөләктәге ун һумдың туғыҙ һумын ғына тотонорға өйрән".**

**Әйе, беҙ, аҡса тураһында һөйләшеү - ул әҙәпһеҙлек, тигән рухта тәрбиәләнгән быуын. Ләкин бөгөн барыһы ла үҙгәрә: милләтебеҙҙең сәскә атыуы беҙҙең һәр беребеҙҙең финанс яғынан ныҡлы булыуына ла бәйләнгән икәнен әле килеп аңлап ултырыуыбыҙ. Беҙ уңышлы кеше булырға ынтылабыҙ, ләкин пландарыбыҙ һәм маҡсаттарыбыҙ "аҡсаһыҙлыҡ" тигән кәртәгә бара ла терәлә. Ошондай хәлдән нисек сығырға, нисек финанс азатлығына өлгәшергә? Һеҙгә тәҡдим ителә торған "Вавилондың иң бай кешеһе" исемле китаптан өҙөк ошо һорауҙарға яуап биргәндәй. Боронғо донъяның уңыш серҙәре сағылдырыла бында.**

Боронғо Вавилон донъялағы иң бай ил була. Быһың сере ябай: был ил кешеләре беренселәрҙән булып байлыҡҡа нисек ирешеү тураһындағы белемде өйрәнә башлай. Ул былай була.

Вавилон батшаһы Саргон яуҙан ҡайтып төшһә, ҡалаһындағы хәлдең үҙгәргәнен күрә. Эшселәр эшһеҙ ҡалған. Сауҙагәрҙәрҙең заказсылары аҙайған. Фермерҙар үҙ продукцияһын һата алмай. Халыҡтың был продукттарҙы һатып алырлыҡ аҡсаһы юҡ.

- Ҡайҙа булған һуң дәүләт эсендәге ул аҡсалар? - тип һорай шунда Саргон үҙенең вәзиренән.

- Ул аҡсалар ҡалалағы бер нисә бай кешенең мөлкәтенә әйләнгән, - ти вәзир.

- Ни өсөн ул аҡсаларға бер нисә кеше генә хужа була алған һуң?

- Сөнки улар байлыҡҡа өлгәшеү юлын белә, - ти вәзир. - Ләкин уларҙы быының өсөн генә ғәйепләп булмай бит. Кемдәндер ғәҙел эшләп тапҡан аҡсаһын тартып алып, аҡсаһыҙҙарға биреү ғәҙелһеҙлек буласаҡ.

- Ә ниңә, бөтә кешеләр ҙә байығыу юлын белмәй ҙаһа!?

- Ләкин быға өлгәшеп була, - тип тағы ҡаршы төшкән вәзир. - Тик шул белемгә өйрәтеүсене табырға кәрәк.

- Беҙҙең ҡалала байығыу юлын кем яҡшыраҡ белә һуң?

- Аркад, әлбиттә. Вавилондың иң бай кешеһе.

- Әйт, ул иртәгә миңә килһен...

Икенсе көнөнә 70 йәштә булыуына ҡарамаҫтан үҙен йәштәрсә енел тотҡан Аркад батша эргәһенә килә.

- Аркад, һин байлығыңа нисек өлгәштең? - тип һорай унан батша.

- Мин беҙҙең ҡаланың һәр кешеһе өсөн асылған мөмкинлектәрҙе генә файҙаландым, - ти Аркад.

- Аркад, ҡалабыҙ халҡын байығыу ысулына өйрәтеп буламы?

- Бер кеше өйрәнгән нәмәне икенсе кеше өйрәнә алырға тейеш.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батшаның күҙҙәре янып китә.

- Аркад, һин мин ишетергә теләгән һүҙҙәрҙе әйттең. Һин ошо белемгә уҡытыусыларҙы өйрәтергә теләмәҫ инеңме? Улар аҙаҡ үҙ уҡыусыларын өйрәтер ине.

- Үҙем белгәндәр менән бүлешергә әҙермен, - ти Аркад. - Миңә 100 кешенән торған класс әҙерләтегеҙ, мин уларҙы көшөләктә нисек тултырырға өйрәтермен.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**

✓ *Һинең нимә һөйләгәнең, айырыуса икенсе бер кеше тураһында нимәләр әйткәнең үҙең хаҡында ла бик күпте һөйләй.*

*(Поль Валери).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МАРТ ЮБИЛЯРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**10-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Башҡорт. Ҡарта. Ғарипов. Таба. Аждаһа. Буға. Ура. Һыу. Ур. Атлант. Бабай. Кәрим. Сөмбәй. Милади. Аралбаев. Сама. Йүкә. Кино. Әтәс. Ел.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Туғыҙбаева. Йылға. Ғафури. Ләйсән. Шәкүр. Ғаилә. Етәксе. Паль. Авва. Трамвай. Ра. Ситдиҡова. Лампас. Акула. Армыт. Йома.

КӘҢӘШЕМ...

## СӘХӘРГӘ НИМӘ ӘҘЕРЛӘРГӘ?

Сөннәт буйынса сәхәрҙе төндөң һуңғы өлөшөндә иртәнге намаҙ алдынан тамамларға кәрәк. Ул туҡлыҡлы, файҙалы булырға тейеш. Аллаһы Тәғәлә илсеһе рамаҙан айында иртәнге аштың мөһимлеге тураһында шулай тигән: "Сәхәр ашағыҙ, унда, ысын мәғәнәһендә, бәрәкәт бар" (Бохари һәм Мөслим).

**Беренсенән, һыуһата торған ризыҡтан баш тартырға кәрәк:**
- кәнфит, шоколад, газлы һыу, һут;
- татлы аҙыҡ;
- әсе, майлы, тоҙло ризыҡтар;
- кофеин: ҡара сәй һәм кофе.

**Икенсенән, сәхәрҙе дөрөҫ төҙөргә:**
- һыу һәм үләндән сәй. Ифтар һәм сәхәр араһында тейешле күләмдә һыу эсеү мөһим. Бер юлы түгел, эсемлекте шул араурыҡта дөрөҫ бүлеп эсергә кәрәк. Айырым һауыҡта һыу һәм һөтһөҙ, шәкәрһеҙ үлән сәйе әҙерләп ҡуйырға.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Баймаҡ районы** Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, **Салауат районынан** Фәриә Ниғмәтова, **Ауырғазы районы** Моразым ауылынан Ғәлимә Көсәпҡолова, **Әлшәй районы** Яңы Сәпәш ауылынан Гөлсәсәк Ғоффанова, **Миәкә районы** Богданово ауылынан Илүзә Ғәлиева, **Шишмә районы** Ҡара Яҡуп ауылынан Р. Ҡараголов, **Белорет ҡалаһынан** Зөбәржәт Суфиянова, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәшиҙә Ғиззәтуллина, Байназар ауылынан Көнһылыу Ҡотлобаева, **Ейәнсура районы** Иҫәнғол ауылынан Нурия Ҡунысбаева һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Һәммәгеҙгә ныҡлы һаулыҡ, бәхетле ғүмер, күңел күтәренкелеге, яҡындарығыҙҙың игелеген, изге уй-ниәттәрегеҙ тормошҡа ашыуын, эштәрегеҙҙә уңыштар теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 март Премьера! "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев), драма. 12+
**31 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**1 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 март "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 12+
**29 март "Униженные"** (З. Биишева), драма. 16+
**30 март "Р"-һыҙ ҡалған Мырҙабай"** (З. Фәйзуллина), әкиәт. 11.00 0+
**"Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (Р.Н. Гюнтекин), музыкаль драма. 12+
**31 март "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

*Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә:*
**1 апрель "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**2 апрель "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27 март "Рахманинов. Романсы"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**30 март "Уфимский Бродвей"** Ф. Иркина концерты. 6+
**31 март "Бәхет йәшнәп йәшәүҙә"** Л. Биктимерова концерты. 6+
**1 апрель "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+
**"Музыкальный интерактив"** 4-7 йәшлек балалар өсөн. 13.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 март Премьера! "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+
**29 март "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Бутулла), моңһоу комедия. 12+
**1 апрель "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 март "А музы не молчали..."** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+
**30 март Премьера! "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+
**31 март** БР халыҡ артисы **Фәим Әхмәтйәновтың** хәтер кисәһе. 6+
**1 апрель "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 18.00 12+
**2 апрель Премьера! "Мы едем, едем, едем..."** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27 март Премьера! "Һинән фатир, минән ир!"** (Н. Ғәйетбай), гротеск-комедия. 12+
**28 март** Бүребай ауылында гастролдә: **"Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәте. 15.00 0+
**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 16+
**28 март "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**29 март "Әлимә, йәки Мырҙаш ҡарт туйы"** (Д. Юлтый), драма. 12+
**30 март Премьера! "Һинән фатир, минән ир!"** (Н. Ғәйетбай), гротеск-комедия. 12+

### БР Милли музейы

**30 март "Таштың хикмәтле донъяһы"** күргәҙмәһе асыла. 15.00 6+
**31 март "Бөгөнгө йәмғиәттә юмор һәм сатира"** әҙәби сара. 12.00 6+
**1 апрель "Таштың хикмәтле донъяһы"** сара. 12.00 6+
**2 апрель "Малахит ҡумта"** интерактив экскурсия 14.00 6+

✓ *"Ағасты беҙ нимәһенә ҡарап билдәләйбеҙ? Имәнме ул, ҡайынмы? Әле олонона барып еткәнгә тиклем япрағынан ҡарап билдәләйбеҙ. Әгәр һинең япрағың ҡайын булһа ғына, һин - ҡайынһың".*

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ЫСЫНБАРЛЫҠ ШУЛАЙ,

## әммә рухи тамырҙар берләштерә

**Бөгөн башҡорт йәмғәтселеген нимә борсой? Ауылдарҙа һәм ҡалаларҙа, йәки бөтөнләй сит илдәрҙә ғүмер иткән милләттәштәребеҙ ниҙәр кисереп, ниндәй уйҙар менән йәшәй? Был һорауҙарға яуаптарҙы ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында сәхнәләштерелгән "Ете быуын. Һаҡлаусылар" һәм "Ете быуын. Йәштәр" тигән яңы спектаклдәр бирҙе. Театрҙың "вербатим", йәки документаль театр тип аталған төрөндә ижад ителгән был спектаклдәрҙә беҙ үҙебеҙ, йәғни замандаштар сағылдырылды.**



Театр һәр ваҡыт үҙ заманының көҙгөһө булған. Ул властағыларға халыҡ фекерен, ә халыҡҡа властағылар ниәтен еткергән, иң көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәргән, көлкөһө лә, аянысы ла сәхнәгә сығарылған. Ә бына театраль тамашаның "вербатим" тигән төрөнә нигеҙ үткән быуаттың 20-се йылдарында совет Рәсәйендә һалынған, тип иҫәпләнә. Ул ваҡытта тамашасылар спектаклдә массовка урынында булып, актерҙар тамашаны һуңғы яңылыҡтар менән тулыландыра барып сығыш яһаған. Йәғни, заман талабына ярашлы барлыҡҡа килгән документаль театр әҙәби пьесаға нигеҙләнмәгән, уның геройҙары - йәмғиәтебеҙҙә йәшәгән ысын кешеләр, уларҙың һүҙҙәре һис үҙгәртелмәй актерҙар тарафынан еткерелә.

М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актерҙары ла ике өлөштән торған спектаклдең геройҙарын беҙҙең арала йәшәп ятҡандар араһынан һайлап алған. "Ете быуын. Һаҡлаусылар" тигән тәүгеһендә Йылайыр районына йәйге экспедиция ваҡытында тупланған материалдар сағылдырылған. Бында беҙ ауыл кешеләренең тормошо, булмышы, уй-кисерештәре, үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәк тураһында уйланыуҙары менән таныштыҡ. "Тыуған тел бөтһә, милләт тә бөтәсәкме?" - ошо һорау спектакль буйына һәр тамашасының күңелен өйкәп торҙо. Спектаклдә һөйләнгән монологтар тыуған ер, туған тел, рух, иман, ауылдағы эшһеҙлек, айыҡлыҡ кеүек темаларҙы үҙ эсенә алды. Был мөхиттә яҡшы аңлаған кешеләр геройҙар араһында үҙҙәрен йә яҡындарын таныһа, ауылдан йыраҡ торғандар үҙҙәре өсөн асыш яһаны. Ауылда йәшәгән милләттәштәребеҙҙең күңеле тулы ғәм икән дә, тип уйланып ҡайтыусылар ҙа булғандыр, моғайын. Халыҡ араһында, уның тын алышын һиҙеп-белеп йөрөгән беҙҙең дә күңелдәребеҙҙе аҫтын-өҫкә әйләндерҙе актерҙар. Әллә ҡасандан ауыр йөк булып торған уйҙарҙы бүлешкәндәй, асыҡтан-асыҡ әңгәмәләшкәндәй тойҙоҡ үҙебеҙҙе. Туған телендә һөйләшмәгән балалар, көпә-көндөҙ ҡапҡаһы бикле ауылдаштар, эшһеҙлектән эскегә һабышҡандар, уларҙы ағыулаған ғәмһеҙҙәр, тере сағында баһаланмаған шәхестәр, һәр кемгә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер изге күңеллеләр, ихластар - бына кемдәр хаҡында был спектакль-вербатим. Улар - башҡорт халҡының рухын, йолаларын, булмышын һаҡлап ҡалған бер утрау.



Был утрауҙан сығып киткәндәр "Ете быуын. Йәштәр" спектакль-вербатимында сағылыш тапҡан. Ҡалала тыуып үҫкән, йәки оҙаҡ йылдар таш йорттарҙа йәшәп, асфальт юлдарҙы тапап күңелдәре лә ҡата төшкән, ҙур донъяла үҙҙәрен эҙләгән кешеләр улар. Араларында исеме генә башҡортса булып ҡалғандар, бөтә күңеле менән үҙенең милли булмышын инҡар итеүселәр, йә, киреһенсә, сит милләттән булып, башҡорт донъяһын яҡынданыраҡ аңларға теләүселәр, глобалләшеү шарттарына яраҡлашып йәшәүселәре лә бар.

Был спектаклдә тәүгеһендәге кеүек аҫалы балаҫтарҙағылай сағыу төҫтәр юҡ, бар донъя ҡараға, бер төрлөлөккә мансылған. Шулай ҙа йәштәребеҙ һис тә битараф түгел: улар туған тел, халыҡ киләсәге тураһында ла борсола, тик был мәсьәләләрҙе үҙҙәренсә хәл итә. Әлбиттә, телдәре саф башҡортса түгел, күбеһе фекерҙәрен русса яңғырата. Был - йәштәребеҙҙең фекерләү ҡеүәһе башҡорт телендә үҫешмәүен, телдең аш бүлмәһе кимәлендә ҡала барыуын сағылдырған аяныслы бер күренеш булараҡ ҡабул ителә. Ә шулай ҙа һуңлап булһа ла үҙ хатаһын төҙәтергә тырышҡандарға һоҡланыу менән ҡарала: ҡатнаш никахтан тыуып, башҡорт телен белмәй үҫһә лә, балаларын әсә теленән мәхрүм итмәҫ өсөн күп көс һалған, башҡортлоғонан һис тартынмаған йәштәребеҙ бар. Улар - күптәребеҙгә өлгө күрһәтерҙәй афариндар. "Ете быуын. Йәштәр" спектакль-вербатимда яңғыраған фекерҙәр араһында "Ағасты беҙ нимәһенә ҡарап билдәләйбеҙ? Имәнме ул, ҡайынмы? Әле олонона барып еткәнгә тиклем япрағынан ҡарап билдәләйбеҙ. Әгәр һинең япрағың ҡайын булһа ғына, һин - ҡайынһың", - тигән һүҙҙәр йөрәктәргә уйылып ҡалды...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быуындар бәйләнешен һәм айырымлығын сағылдырған спектаклдәрҙе ҡараусылар аҙаҡтан үҙ фекерҙәрен белдереп, уны театрҙың төп сәхнәһенә күсерергә кәрәклеген билдәләп үткәйне. Әммә был сәхнәләштереү күҙгә-күҙ ҡарашып ултырып, күңелдәр менән аралашыу мөмкинлеге биргән Бәләкәй сәхнәлә уйналыуы отошло. Бында һәр кемдең төпкөл аңына ойотҡо һалына, йөрәктә быҫҡыған ҡүҙ ялҡынлана, күңел күҙҙәре асыла. Ошондай сихри көскә эйә тамашаларҙы бөтә ғаилә менән бер-бер артлы барып ҡарау отошло. Был мөмкинлеккә юл асҡан "Замандаш" проекты һәм уның башланғысында тороусы шеф-драматург Сәрүәр Сурина, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры актерҙары, спектаклдәрҙең ҡуйыусы режиссеры Рима Харисова, ҡуйыусы рәссам Әлиә Байрамғолова, композитор Урал Иҙелбаев, яҡтыртыу оҫтаһы Таһир Аҡмановҡа рәхмәт.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨНДӘШМӘҮ АЛТЫН, ТИП...

## алтын һүҙең йәшермә

Атаһыҙ бала алты кешегә хаслыҡ итер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә һин кемдәндер бер башҡа бейегерәкһең икән, был һинең башыңдың ҡаҙанышы, тигәнде аңлатмай.

**(Веслав Брудзинский).**

Уҡытыусыларға миһырбанлы бул. Улар һинең хөрмәтеңә мохтаж булмаһалар ҙа, йәлләүеңә мохтаж.

**(Эшли Брильянт).**

Бер кешегә ҡарағанда, бер төркөм кешене алдауы еңелерәк.

**(Кароль Бунш).**

Һинең нимә һөйләгәнең, айырыуса икенсе бер кеше тураһында нимәләр әйткәнең үҙең хаҡында ла бик күпте һөйләй.

**(Поль Валери).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Боронғо Һиндостанда тәбиғәт күренештәре менән бәйле бик күп тылсымлы йолалар атҡарыла торған булған. Мәҫәлән, дин әһелдәре ямғыр яуҙырыу тураһында доға ҡылып, йола башҡарылыу менән ямғыр яуа торған булған. Доғаларҙың тәьҫирлелеген дә, уларҙы үтәү тәртибен дә яҡшы белгән бер кеше берҙән-бер көндө байлыҡ һорап, байлыҡ аллаһы Лакшмиға төбәп, доғалар ҡыла башлаған. Ун йыл дауам иткән уның был доғалары. Әммә ошо тиклем ваҡыттан һуң ул ысынында бай кешенең хәле нисек буласағын аңлау дәрәжәһенә еткән һәм төпкөл бер ауылға китеп, ер һөрөп, иген үҫтереп, ысын хеҙмәт кешеһенә әйләнеп көн итә башлаған.**

**Бер саҡ эштән арынып, доға уҡып ултырһа, алдына иҫ киткес һылыу ҡатын килеп баҫҡанын күргән.**

**- Һин кем һәм бында ни эшләйһең? - тип һораған кеше был ҡатындан.**

**- Мин байлыҡ аллаһы Лакшми, һин ун йыл буйы миңә доғаларыңды ебәргәйнең, бына хәҙер килдем һәм һине бай кешегә әйләндермәксемен, - тигән ҡатын.**

**- О, ҡәҙерле Лакшми, - тип ҡысҡырып ебәргән кеше, - доға уҡып, һиңә үтенестәремде ебәргән йылдарҙа мин бай кешеләрҙең яҙмышы әллә ни матур булмағанын, тир түгеп табылған ризыҡтың татлыраҡ икәнен белергә өлгөрҙөм. Шунан инде байлыҡҡа булған ҡыҙыҡһыныуым юҡҡа сыҡты. Һин һуңланың. Тик әйт әле, ни өсөн һин элегерәк килмәнең һуң?**

**- Тураһын әйтәм, - тигән Лакшми. - Һин, әлбиттә, изге кеше, доғаларыңды һәм йолаларҙы ла теүәл башҡарҙың, байлыҡҡа ла лайыҡһың. Шуға ла мин һине яраттым һәм һиңә изгелек теләгәндән килергә ашыҡманым..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты** - 24 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 383



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.


1 582218 911006 23011